**Йыһат Солтанов**

# ЕР ОЖМАХЫНАН КҮРЕНЕШТӘР

Драма 2 шаршауҙа 7 сәхнәлә

*Таңнура ҡыҙыма арнала*

## Баш һүҙ: үгәйһетелгән башҡорт драмаһы

ИншАллаһ, һигеҙенсе драмамды осланым (туғыҙға тултыраһы ҡалды). Быны берәү ҙә көтмәй ҙә, тәбрикләмәй ҙә, әлбиттә.

Китап кәштәләре ҡәләмдәштәремдең томдары менән тығыҙланып тулған ҡыуаныслы замандарҙа, ун ете томлыҡ Әҫәрҙәремдең томдары әлегәсә нәшер ителгәне юҡ, драмаларым – шул томдар араһында. Билдәле мәҡәл туранан-тура һуға: ит изгелек –көт яуызлыҡ, һәр хәлдә, миңә шулай.

### Үгәйлек

Чиновниктар быуа боғаҙҙан,
Һулағанда һулыш алдыртмай.
Янып барған ялһыҙ йөрәкте
Услап тотам, көлгә ҡалдыртмай.

Рәсәй тигән үгәй әсәйҙең
Башҡортостан – үгәй балаһы.
Башҡорт кәрәк түгел үгәйгә,
Кәрәк ере, һыуы, һауаһы.

Башҡорт Йыһат кемгә кәрәкһен –
Үгәй Башҡортостан үгәйе?..
Үҙ балаһын үгәйһеткәнде
Һөҙөп йығыр уҙғын бүгәйе!..

Ә шулай ҙа юғарылыҡлы Илаһымдан һауылған нурлы илһам был донъяның һынаыуҙарын һындыра. Кесе ҡыҙым Таңнураға үҙем белгән башҡорт ауылының ғәрәсәтле осорон әрнеп һөйләгәс, ниңә шуны әҫәр итеп яҙмайһың – яҙ, тигәне йөрәгемә һис тынғылыҡ бирмәне һәм драма рәүешле төртөп сыҡты. Беҙҙең быуын кешеләре кисергәндәрҙе һис бер ҡағыҙ битенә лә һыйҙырып бөтөп булмай, әлбиттә, әммә остоғо ғына булһа ла сағылды, тип уйлайым...

## Ҡатнашалар:

Хикмәт Аралбаев – колхоздың тоҡом айғыры Ҡарайғырҙы ҡараусы ҡарт. Аяғы аҡһаҡ, беренсе донъя һуғышында Германияла пленда булып ҡайтҡан, 1920 йыл Польша фронтында Сталин ординарецы. Мөкиббән коммунист, ғүмере буйына “Правда” гәзитен алдырып, йылдыҡын-йылға төпләп йыйып бара.

Гөлзәғифә – Хикмәттең әбейе.

Йәмилә – уларҙың еткән ҡыҙы (20 йәштә), ауыл мәктәбендә уҡытыусы.

Язарый – уларҙың фронттан өс көнлөк ялға ҡайтҡан улы, лейтенант, энәнән-ептән офицер кейемендә, билендә һары кобуралы пистолет.

Алһыу – Язарыйҙың өҙөлөп һөйгән ҡыҙы, Йәмиләнең әхирәте.

Ғәйникамал – Гөлзәғифә әбейҙең тәүге иренән тыуған ҡыҙы, биш бала әсәһе, ҡырҡ йәштәрҙә. Ире Янбулат һуғышта хәбәрһеҙ юғалғас, ағыулы башаҡ бойҙайы ашап сирләгән биш балаһы менән ошо өйҙөң төпкө бүлмәһендә бергә тора.

Байсәләм – ВКП(б)-ның район комитетынан тәғәйенләнгән “үҙе – баш, үҙе – түш” упалнамус (уполномоченный).

Шкуратов – натуралата ауыл хужалығы һалымын илдән ҡайырып йыйыусы агент.

Рифҡәт – фининспектор, аҡсалата һалым йыйыусы агент, үçмер егет.

Хәким – сельсовет председателе, һыңар аяҡлы, ҡултыҡ таяҡлы фронтовик.

Шәғәли – алъйот үçмер, йәше билдәһеҙ, үҙенә күрә таҡмаҡсы-йырсы, билендә ағас ҡылыс, ауыл түрәләренең йомошсо-курьеры булып йөрөй.

НКВД хәрбиҙәре:

Капитан.

Һалдат.

Милиционер.

Һалым түләмәүҙә ғәйеплеләр:

Сәбилә.

Гөлсәсәк.

Бәләкәс малай.

Бәләкәс ҡыҙ.

Ваҡиғалар ауылда Бөйөк Ватан һуғышы осоронда 1942 – 43 йылдың ҡышында бара.

# Беренсе шаршау

## 1-се сәхнә

Хикмәт ҡарттың алты мөйөшлө өйө, алғы бүлмә. Түрге стенала ике портрет: йылмайып төшкән сая мыйыҡлы Сталин *(1920 йылғы фото)* һәм европаса ыçпай ҡиәфәтле немец-катын.

 

Төпкө бүлмәнән Ғәйникамалдың тамаҡ шеше *(септик ангина)* менән үлергә ятыусы балаларының ыңғырашып илауы, меҫкен әсәнең: “Уй бәпескәйҙәрем, уй ҡолонсаҡҡайҙарым!..” – тип өҙәләнүҙәре ишетелә. Алғы бүлмәлә Гөлзәғифә, Йәмилә *(ул ап-аҡ күлдәктән, мәктәпкә эшкә китергә әҙерләнә).* Тәҙрә башындағы ҡара-түңәрәк шаңғыраҡтан *(радиорепродукторҙан)* ҡеүәтле йыр ағыла:

Америка – уң яҡта,<br>
Европа – һул яҡта.<br>
Беҙ йәшәйбеҙ урталыҡта –<br>
Сталинлы ожмахта!

Беҙ йәшәйбеҙ, беҙ йәшәйбеҙ<br>
Сталинлы ожмахта! --

Сталин премияһы лауреаты, халыҡ шағиры Ожмахйән Йәннәтбаевтың бәхетле колхоз тормошона арналған әҫәренән өҙөк тапшырҙыҡ. Иптәш Сталиндың атайҙарса хәстәрлекле ҡанаты аҫтында сынығып тәрбиәләнгән сталинсыл ҡорос рухлы колхозсыларҙың рух ныҡлығы ҡаҡшамай, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы аяуһыҙ тыл фронтында йәнен-тәнен йәлләмәй көрәшә улар. Һөйөклө атайыбыҙ бөйөк Сталиндың...

Йәмилә *(шаңғырауыҡты һүндереп).* Уф әсәкәйем, апайымдың үҙәккәйе өҙөлә бит инде!.. Биш балаһы бер юлы...

Гөлзәғифә. Үҙе ғәйепле. Атаһы күпме туҡыны, ҡар аҫтында ҡышлаған ашлыҡтың бөртөгөнә лә ҡағылмаҫҡа, тип.

Йәмилә. Нишләһен? Сараһыҙҙың көнөнән. Сабыйҙары аҫка шешенә ине...

Гөлзәғифә. Шешенһә лә, түҙерҙәр ине әле, һыйырыбыҙ быҙаулағансы. Бына быҙаулап бирҙе, ауыҙҙарына аҡ тейҙе, әммә һуң шул, һуң... Уҡытыусы булараҡ үҙеңә тейешле тигән ҡаҙна онондо ла ҡырт киҫтеләр...

Йәмилә. Апайымды әйтәм, ҡыш башынан уҡ үҙебеҙгә күсенһә, ни ҡапһаҡ та бергә ҡабыр, ҡар аҫтынан ем һепереп соҡсоноп йөрөмәҫ ине. Баймыйымдың нигеҙе, тип йәбешеп ятты.

Гөлзәғифә. Уныһы хәбәрһеҙ юғалғас, өйөн йылыта алмай, биш балаһын итәгенә йәбештереп килеп инде. Һары ауыҙлы ҡарға балалары кеүек, үпкәләре күренеп тора. Башты ташҡа орорҙай булдыҡ инде.

Йәмилә. Ҡайғырма, әсәй. Гитлер фашизмын еңербеҙ, Сталин иптәштең ер ожмахын төҙөрбөҙ. Атайым әйтмешләй, Сталин барҙа билебеҙ биртенмәҫ.

Гөлзәғифә. Эй ҡыҙым, тотаһың да атайыңдың һантый һүҙен һөйләйһең. *(Сталин портретына төртөп).* Күрәһеңме, мыйығын ҡайһылай борған! Иртән тора ла шул мыйыҡлы тәреһенә табына, мыйығын да шуныҡына оҡшатып һыпыра.

Йәмилә. Нишләһен, Польша фронтында Сталиндың ординарецы булдым, ти бит.

Гөлзәғифә. Уныһын шайтан белә... Ысталин һыҙған яҡты юлдан барам, тип, утыҙынсы йылда ауыл халҡын колхозға ҡыуып йөҙәтте, атайымды, кулакһың тип шул колхозына алмай, һыуыҡ Себергә һөрҙөрттө... Рәнйеһәң: Ысталин шулай ҡуша, Брауҙа гәзитәһендә шулай яҙылған, тиер ҙә ҡуйыр ине.

Йәмилә. “Правда” гәзите, әсәй.

Гөлзәғифә. Миңә ни, һуҡыр тауыҡҡа, барыбер. Нисәмә йылдар буйына шуны алдырта, бер хәрефен ҡалдырмай уҡып бара. Күҙ ҡараһындай ҡурсалап, йылдыҡын йылға төпләп йыя. Брауҙаһы менән шкаф аҫты, өй түбәһе тулды... Уны белмәҫһең: әллә мыйыҡлыһына, әллә *(икенсе портретҡа төртөп)* анауы тыржыҡ танау мимес мәрйәһенә табына.

Йәмилә. Битәрләмәсе, әсәй. Фрау Гретхен – атайымдың йәшлек мөхәббәте бит ул, һис онота алмайҙыр.

Гөлзәғифә. Битәрләмәйем, әйтәм генә. Минең өсөн Ысталин ни ҙә Гретхен ни – йәнәш терәлешеп тора бирһендәр. Булаһы – булған, буяуы уңған, тигәндәй. Ырымбурҙан ҙурайттыртып алып ҡайтып элмәһә, белмәҫ тә инек әле... Бына алмаш күлдәгең юҡ, үҙең мөғәллимә тағы.

Йәмилә. Һарыҡташ баҙарынан алған, бер түгел, ике простыня...

Гөлзәғифә. Гуспитәлдән синатарҙар сығарып һатҡан шул иҫке-моҫкоға ҡалды көн.

Йәмилә. Апайым оҫта тегенсе – икебеҙгә лә күлдәк өлгөртәм, тине.

Гөлзәғифә. Сәүит ожмахының күлдәге...

Тышта Шәйәхмәт йырлай:

Ағиҙелгә ағып төшә
Ҡариҙелдең йылғаһы.
Йәшәһен совет власы,
Ожмах уның донъяһы!

Йәмилә көлә.

Гөлзәғифә. Алъйот киҙеүгә сыҡҡан. Уның өсөн тамуғы ла ожмах.

Шәйәхмәт инә.

Шәйәхмәт. Керәйөр килә, күрәйөр килә! Силсәүит Хәким ағайым мине керәйөр итеп тәғәйенләне.

Йәмил. Курьер итеп.

Шәғәли. Упалнамус Байсәләм ауылда кем нимә эшләгәнен, нисек тын алғанын күрә йөрөргә ҡушты, тиҙ үк миңә килеп хәбәр ит, тине.

Гөлзәғифә. Әле йырлаған йырыңды ла шул йырларға ҡуштымы?

Шәғәли. Шул ҡушты.

Йәмилә. Күргән береңде шуға барып әйтәһеңме?

Шәғәли. Әйтә торғанын әйтәм, әйтмәй торғанын әйтмәйем. Иҫәүән тиһәләр ҙә, иҫем дөрөҫ минең. Ул ҡушмағанды ла йырлайым:

Персиҙәтел ашай бойҙай он,
Мин ашайым мысай он.
Үлмәйенсә ҡышты сыҡһам,
Эшләмәйем, сысайым!

Йәмилә көлә.

Гөлзәғифә. Тәүбә-тәүбә, быныһын кем өйрәтте?

Шәйәхмәт. Әйтмәйем.

Йәмилә *(алъйотто битенән һыйпап).* Әйт инде!

Шәйәхмәт. Ошо матур апайым матур ҡулы менән битендән һыйпағас, әйтһәм әйтәйем инде. Малсылыҡ фермаһындағы һыңар аяҡлы һайыҫҡан өйрәтә миңә.

Гөлзәғифә. Һәй, күрәҙә икән һыңар аяҡлың!

Шәғәли. Күрәҙә, үтәнән-үтә күрә. Ауылда нисә бала астан үлгәнен дә әйтте.

Йәмилә. Нисәү?

Шәғәли. Һанһыҙ. Мәктәбеңдә нисә парта буш ҡалғанын күрмәйһеңме ни?

Йәмилә. Күҙем күрмәй шул, ҡустым.

Шәғәли. Упалнамус Байсәләмдеке лә күрмәй. Антисовет ҡотҡо һалып йөрөһәң, телеңде йолҡоп алырмын, тине.

Гөлзәғифә. Алыр ҙа.

Шәғәли. Инәй, эсем өҙөлөп бара... берәй ҡабымлыҡ ҡына нәмәкәйең юҡмы?

Гөлзәғифә. Тирмәнебеҙ тартмағас, үҙең маҡтап йырлаған ожмах икмәге инде. *(Жмых киҫәге һона).*

Шәйәхмәт. Эй, ашамайым, мамыҡ жмыхынан эс ҡата.

Гөлзәғифә. Эсең ҡатһа, һөт эсерһең, малсылыҡ фермаһы өйөндә йоҡлайһың бит. Уҡытыусы башы менән Йәмилә апайың да, әнә, көн дә жмых ашап китә мәктәбенә.

Шәйәхмәт. Ярай, алайым инде *(жмыхты кеҫәһенә тыға).* Ныу хәйләкәрһең, инәй! Язарый, Хәсән ағайҙарҙың туйына тип төйнәгән оноң өй башында күгәреп яталыр әле!

Йәмилә. Күгәрмәç, туйыбыҙға килерһең.

Шәйәхмәт. Их, тиҙерәк бөтһөн ине шул һуғыш! Силсәүит Хәким ағай әйтә, беҙҙекеләр фашистарҙы Сталинградта еңеп, Донбасс ҡапҡаһына барып еткән, Берлинды ла алырҙар, ти.

Гөлзәғифә. Бирһен Хоҙай, түҙер әмәл ҡалманы.

Ғәйникамал *(төпкө бүлмәнән сығып).* Өçтәүенә, налог өçтөнә налог! Ваҡытында түләй алмаһаң, күбек-мүбеге артҡан недоимка! Пеня тиҙәрме шуны...

Шәйәхмәт. Шулай күпме ни, апай?

Ғәйникамал. Ике ҡулыңда ун бармағың бармы?

Шәйәхмәт *(бармаҡтарын һанап).* Берәү, икәү, өсәү... бар, буғай.

Ғәйникамал. Берәм-берәм бөкләп һана улайһа: сельхозналог, военный налог, минимум хеҙмәт көнөң тулмаған өсөн налог, “за бездетность” налог, йәнә заемға яҙылыу...

Шәйәхмәт. Күп булып китте, апай, бармаҡтарым буталды.

Ғәйникамал. Уйлай башлаһаң, аҡылыңдан яҙырлыҡ: ошо ерҙә өйөң торғаны өсөн – аҡсалата түлә, һыйырың бармы-юҡмы – йылына ике йөҙ литр һөт килтер, илле кило ит, бер һыйыр тиреһе, йәки биш һарыҡ тиреһе, ике кило йөн бир; тауығың бармы-юҡмы – йөҙ алтмыш дана күкәй, бер кило тауыҡ ҡаурыйы; бәрәңге үçтермәһәң дә – ун биш кило турап киптерелгән бәрәңге...

Шәйәхмәт. Еңгәй, ерле-юҡҡа зарланма. Упалнамус Байсәләм әйтә, Америкала халыҡ интегә, ә беҙ Сталин ожмахында йәшәйбеҙ, ҡәҙерен белергә кәрәк, ти. *(Йырлай-йырлай үҙ юлына йүнәлә)*:

Кемдән күкәй, йөн йолорға
Сталин бабай белә.
Күкәйең, йөнөң булмаһа,
Бетеңде һатып түлә!

Йәмилә. Бына һеҙгә алъйот...

Ғәйникамал. Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура йөрөй. *(Бала-сағаһы илашҡан төпкө бүлмәгә йүгерә).*

Йәмилә. Шул Байсәләм тигәндәре тамам теңкәмә тейҙе: имеш, алъйот һамаҡлаған антисовет таҡмаҡтары минән сыға, сөнки минән башҡа ауылда шиғыр яҙған кеше юҡ.

Гөлзәғифә. Әйттем бит, шиғыр яҙма, сәхнәнән тороп һөйләмә, тип. Башыңа етмәһә ярар ине!

Йәмилә. Әсәй, минең шиғырҙарым бөйөк Ленин, Сталин биргән бәхетле тормош – ерҙәге ожмах тураһында!

Гөлзәғифә. Эй ҡыҙым, ҡыҙым, ожмахыңдың тамуҡ икәнлеген анауы алъйот та күрә...

Төпкө бүлмәлә илау-һыҡтау көсәйә, Ғәйникамал үкһеп-илап атлығып сыға.

Ғәйникамал. Әсәкәйем, һеңлекәйем! Бәләкәскәйҙәрем ҡан ҡоҫоп быуыла, тәндәре уттай яна. Уф Баймыйҡайым, ҡайҙа йөрөйһөң!..

Гөлзәғифә. Ҡайҙа йөрөгәнен белмәйһеңме ни, хәбәрһеҙ юғалды тигән ҡара ҡағыҙын алманыңмы ни?!.

Йәмилә. Әсәй! *(Төпкө бүлмәгә атлығалар, унда йән әрнеткес ауаздар. Өйөрөлөп кире сығалар, Йәмиләнең аҡ күлдәге ҡанға буялған).* Эҫелектәре ҡырҡ градустан ашҡан. Ҡан, ҡан... танауҙарынан ҡан сәптерә...

Гөлзәғифә. Ҡыҙым, күлдәгең...

Йәмилә. Уф, нисек мәктәпкә барырға?

Ғәйникамал. Һеңлекәйем, хәҙер... көтөп тор. *(Төпкө бүлмәгә китеп, һоро төҫтәге яңы күлдәк тотоп сыға).*

Йәмилә. Апаҡайым, тегеп тә өлгөрттөңмө ни?

Ғәйникамал. Һигеҙенсе Март байрамында бүләк итермен, тигәйнем, кей инде.

Йәмилә. Уй рәхмәт, апаҡайым!

Ғәйникамал. Ерек ҡабығы һороһона мансып алдым, простыняла госпиталдең ҡан таптары бар ине...

Гөлзәғифә. Уй балаҡайҙарым, рәхмәт төшкөрҙәрем! *(Йәмиләнең өҫтөндәге күлдәген һалдыртып, быныһын кейҙертәләр).*

Ғәйникамал *(һеңлеһенең өҫтөн һыйпаштырып).* Ҡотло булһын, эҫе тәнеңдә туҙһын!

Йәмилә. Апаҡайым, үҙеңә лә тектеңме?

Ғәйникамал. Талсыбыҡтай буйға үҫтең бит, үҙеңә генә берярым простыня китте.

Йәмилә. Хоҙайым, күлдәгең ҡырҡ ямаулы...

Гөлзәғифә. Эшеңә тай, балам.

Ғәйникамал. Бар, һылыуым, бар, дәресеңә һуңлама.

Йәмилә *(ашыҡ-бошоҡ йыйынып).* Мәктәптә утын бөттө, яҙыу ҡаралары туңа, уҡыусыларым барлы-юҡлы өҫ кейемдәрендә ҡалтыранып ултыра. Ҡараһын да әлеге шул ерек ҡабығынан яһайбыҙ, һуғышҡа тиклемге китап, гәзит биттәрен дәфтәр итеп яҙабыҙ. *(Шкафтың аҫҡы бүлкәһенән "Правда" гәзите төпләмәһен алып).* Атайға рәхмәт, "Правда" гәзит төпләмәһенең береһен тураҡларға рөхсәт итте.

Ғәйникамал *(күлдәкте һыйпаштырып).* Үх-ли! Әсәйемдең йәш сағына оҡшап, ҡайһындай ҙа матурһың, һеңлекәйем! Их, ошо зифа һыныңды Хәсәнкәйең ҡайтып күрһәсе! Туйыбыҙға ике аҙна ғына ҡалды тигәндә бынауы яуыз Гитлер ҡуҙғалып, ҡуйыныңа кермәй ҙә китеп барҙы...

Йәмилә *(усы менән йөҙөн ҡаплап).* Иҫемә төшөрмәгеҙ...

Гөлзәғифә. Бәлки, хәйерлегәлер ҙә. Әнә, еҙнәң китте лә һеңде, апайың итәк тулы биш бала менән ҡалды.

Йәмилә *(үкһеп).* Эй Хоҙайм! Ун бала менән ҡалырға ла риза булыр инем мин... *(Портфелен, гәзит төпләмәһен алып сығып китә).*

Ғәйникамал *(һулҡылдап).* Аллаҡайм, ниңә былай бәхетһеҙ иттең беҙҙе?!

Гөлзәғифә. Сабырлыҡ бирһен Раббым...

2-се сәхнә

Төпкө бүлмәлә тынлыҡ, Гөлзәғифә усаҡ тирәһендә булаша. Хикмәт туйтаңдап ҡайтып инә, ҡыптыр тунын, ҡолаҡсынын сөйгә элә.

Хикмәт *(төпкө бүлмәгә ыңғайлап)*. Ейән-ейәнсәрҙәрем ни хәлдә?

Гөлзәғифә. Туҡта, шаулама. Саҡ ҡына тынысландылар, хәйерлегә булһын. Тамам йонсоған әсәләре башын терәп серем итә торғандыр.

Хикмәт. Духтыры ла юҡ бит, исмаһам, уныһын да һуғыш йолдо.

Гөлзәғифә. Аллаһы Тәғәләлә генә инде таяныс.

Хикмәт. “Правда»ла иптәш Сталин әйткәнсә, Аллаға таян, духтырҙан дауалан...

Гөлзәғифә. Тотондо инде, тотондо шул мыйыҡлыһын борғосларға!

Хикмәт. Хәйер, духтыры бар ауылдарҙа ла беҙҙәгеләй тамаҡ шеше ҡоторона, әҙәм балаһы ҡырыла.

Гөлзәғифә. Шөкөр, Ҡуңырҡай быҙауланы. Аҡ кергәс, төҙәлерҙәр.

Хикмәт. Белмәйем, белмәйем...

Төпкө бүлмәләге тынлыҡ боҙолоп, күҙе-башы аларған Ғәйникамал сыға.

Ғәйникамал. Уй атаҡайым, үләләр бит, үләләр бәпескәйҙәрем! Урын-ер ҡалманы, стена ҡалманы – танауҙарынан ҡан бәрә *(кире китә)*.

Гөлзәғифә. Эй Аллам, бир сабырлыҡ! Танауҙарына тыға-тыға сепрәк-сапраҡ бөттө, күлдәклектән арткан простынянан кәфенлек тә ҡалманы...

Хикмәт. Әбей, көфөр һөйләмә! Ҡайҙа минең кисәге “Правда”м?

Гөлзәғифә. Сәнселгере шул брауҙаң! Мә! *(Гәзитте шүрлектән алып бирә)*.

Хикмәт *(гәзитте йыртып)*. Танауҙарына төрнәп тығырға кәрәк *(төпкө бүлмәгә китә)*.

Гөлзәғифә. Эй Аллам, эй Аллам!..

Төпкө бүлмәлә тауыш тына, Хикмәт менән Ғәйникамал сыға. Хикмәт, Сталин портреты тәңгәлендә туҡталып, мыйыҡтарын борғослап текләп тора.

Гөлзәғифә *(Йәмиләгә)*. Әнә-әнә, мыйыҡ бороп тәреһенә табына. *(Хикмәткә)*. Оҡшаған, ныҡ оҡшаған – ҡойоп ҡуйған шул Ысталин мыйығы!

Хикмәт. Әбей! Юлбашсыны миңә тиңләмә!

Гөлзәғифә. Тиңләмәй ни, һин кемдән кәм? Теге егерменсе йылда шул Ысталин менән бергә сәкәштереп эсергә лә тура килгеләне, тип кем шыттырҙы – һинме?

Хикмәт. Мин. Итәғәтле, яҡшы кеше, ҡыйыу комиссар ине. Аяғыма пүлә тейгәс кенә хушлаштыҡ.

Ғәйникамал *(сығып)*. Атаҡайм, ауылыбыҙҙың ауыр хәлен аңлатып хат яҙһаңсы шул яҡшы кешеңә... бергә булғанһығыҙ бит.

Хикмәт. Быға биш былтыр инде. Һәм ул элекке лә түгел – хәҙерге даһийыбыҙ, Лениныбыҙ.

Гөлзәғифә. Һәм һиндәйҙәр менән сәкәштермәйҙер ҙә!

Ғәйникамал. ...балаларыбыҙ үлә, тип...

Хикмәт. Үҙең минауат, ҡыҙым. Сталин ҡуштымы ни һиңә – ағыулы ҡурмас ашатырға?

Ғәйникамал. Асығырға ла ҡушмағандыр бит?

Гөлзәғифә. Ҡара көҙҙән үк, өйөңдө һыуытып, үҙебеҙгә өйҙәш керһәң, күҙ алдында булыр инегеҙ.

Ғәйникамал. Баймыйымдың нигеҙен һыуытмайым, тинем шул.

Гөлзәғифә. Һыуға батҡан ташбалтаны ҡалҡып сығыр тиһеңме?

Хикмәт. Өмөтөн өҙмә, әсәһе. Мин үҙем дә заманында ярман һуғышында юғалып, көтмәгәндә ҡайтып төштөм.

Гөлзәғифә. Аңһыҙ Николай батша заманы ине бит ул. Хәҙергебеҙ аҡыллы: ҡыҙыл әрмис плен төшмәй – үлергә генә хаҡлы, ти.

Ғәйникамал. Етте, етте! *(Һулҡылдап, төпкө бүлмәгә китә).*

Хикмәт. Их! Бирсе әле теге нәмәне! Ярманский һауытты. Фляганы тим!

Гөлзәғифә. Ҡоромай бит шул нәмәң! Ә тәпәндә ыумаслыҡ та оноң юҡ.

Хикмәт. Бир, тигәс, бир!

Гөлзәғифә. Абау-абау, ҡайһылай аҡырасы! Мә, тығын! *(Сысҡан төҫөндәге күк буҫтау көплө боронго герман һалдат фелӛгәһен килтерә, янында һерәйеп тора).*

Хикмәт. Торма һерәйеп, тын алырға ирек бир. *(Феләгәнең ҡапҡасын бороп асып, боғаҙынан горҡолдатып йота).*

Гөлзәғифә. Етәр! (*Феләгәне тартып алып, ҡапҡасын боргослай).*

Хикмәт. Һә-ә-әй, торғаны менән ожмах бит ул, үҙебеҙҙең совет власы! *(Йырлай)*:

> Ағиҙелгә ағып төшә
> Топориндың йылғаһы.
> Йәшәһен совет власы,
> Рәхәт уның донъяһы!

Гөлзәғифә. Ҡарт шайтан!

Хикмәт. Ә шулай ҙа етешмәй. Пулный ожмах булһын өсөн, тағы бер генә уртлатсы әле, әбекәйем!

Гөлзәғифә. Ғарыҡ бул, туй, башҡаса ҡағылмайым! *(Феләгәне өҫтәлгә ҡуя, төпкө бүлмәгә китә).*

Хикмәт *(феләгә ҡапҡасына араҡы һалып, Сталин портреты йәнәшәһендәге фрау Гретхен портреты ҡаршыһына килә).* Фрау Гретхен, ғәфү ит инде мине, ҡайтып китеп хәбәрһеҙ юғалған һөйөклө һерр Һикмутыңды! *(Фрауҙың битенән һыйпай).* Николай батша Ҡыҙыл Тәре ойошмаһы аша әсирҙәрҙе Рәсәйебеҙгә ҡайтартҡанда Мюньхен вокзалында һиңә биргән нәҙер-һүҙемде боҙҙом – ҡуйыныңа кире әйләнеп ҡайтманым, бюргер ирең булып китә алманым *(мышҡылдай).* Бына һин миңә юл хәзеренә шнапс һалып бүләк иткән ярманский феләгә, бына урыҫ

араҡылы ҡапҡасы. Вагон ишеге алдында һуңғы тапҡыр ҡосаҡлашып, һулығып-һулығып иланыҡ... ғәфү ит, фрау Гретхен! *(Эсә. Гөлзәгифә сыға).*

Гөлзәғифә. Бырағтырмай булмаç инде шул мимес тәреһен!

Хикмәт. Теймә! Гүзәл йәшлегем ул минең!

Гөлзәғифә. Тәүге ҡатыным, тип әйт тә ҡуй инде, ҡарт аҙғын!

Хикмәт. Әйтермен дә. Һинең дә бит тәүгең Хөсәйен ине, Ғәйникамал ҡыҙыбыҙҙың атаһы, минең окопташ, йәнуҙаҡ.

Гөлзәғифә. Йәнуҙағың йән биргән, ә һин тере ҡалғанһың.

Хикмәт. Һуғыш бит ул, әбекәй. Киреһенсә лә булыу ихтимал ине, әммә һинең бәхеткә ҡайтып килдем. Мин алмаһам, тол килеш ҡала инең.

Гөлзәғифә. Пөшшш, алмаç инең дә бит, аҙмыш айғырыңа баш булмай, алдан саптырып өлгөрҙөң... Язарыйыбыҙ тыуғас та аҡылға ултырманың, уңлы-һуллы ҡармандың...

Хикмәт. Булған да бөткән инде. Уның ҡарауы Язарыйыбыҙ Сталин иптәшкә мыҡты әфисәр булды, Башҡорт атлы дивизияһында дошманды ҡыра хәҙер.

Гөлзәғифә. Фрау Гретхеныңдан да улан тыуманымы икән? Һин аҙғындың түле теремек ине.

Хикмәт (*күңелһеҙ).* Тыуһа – тыуғандыр... Алып кит күҙ алдымдан. *(Әбей фляганы ала).* Былай ҙа әрнеүле саҡ, юҡты-барҙы соҡсоп сығарма.

Гөлзәғифә. Әгәр фашист улың улыбыҙға атһа?.. Әстәғәфирулла тәүбә.

Ишек шаҡыу.

Хикмәт *(асыулы).* Ин, бикләнеп ултырмайбыҙ!

Ауыл халҡынан натуралата налог-һалым “тунап алыусы” агент Шкуратов инә, ҡултыҡ аҫтында һоро ҡатырғы тышлы амбар кенәгәһе.

Шкуратов. Сәләм бирҙек. Налоговой агент иптәш Шкуратов.

Хикмәт. Сәләм алдыҡ. Беләбеҙ.

Шкуратов *(кенәгәһен асып).* Гражданин Аралбаев Хикмәт, ҡасан түләй башлайһың?

Гөлзәғифә. Ниндәй түләү? Беләһең дәһә: бабайым йәнбәлит, льөғәтәһе бар.

Шкуратов. Быйылдан башлап льгота юҡ.

Гөлзәғифә. Бәй-бәй, аҡһаҡ бабайым әллә шәбәйеп киттеме, йүгереп үк йөрөймө?

Шкуратов *(Хикмәткә).* “Правда” алдыртаһың, уҡығанһыңдыр. Так что, һиңә лә йөҙ процент һалым, ошо беренсе кварталдан егерме биш процентын погаси.

Хикмәт. Погасим, әгәр погосҡа китмәһәм.

Шкуратов. Китенргә хаҡың юҡ! Иптәш Сталин да түҙә, һин дә түҙ. *(Кенәгәнең икенсе битен асып).* Гражданка Аралбаева Ғәйникамал бындамы?

Гөлзәғифә. Балаҡайым, сыҡ! *(Ғәйникамал сыға).*

Ғәйникамал. Әәә, тереләтә үкертеп тунаусы.

Шкуратов. Тунаусы түгел, ә налоговой агент -- иптәш Шкуратов.

Ғәйникамал. Кемгә иптәштер, ә беҙгә барыбер.

Шкуратов. Гражданка Аралбаева, недоимкаларыңды ҡасан тапшырып бөтәһең?

Ғәйникамал. Ниндәй недоимкалар?

Шкуратов *(кенәгә битенә бармаҡ төртөп).* Ит...

Ғәйникамал. Иллешәр килограмм итте биш өйгә уртаҡлашып, яңғыҙ һыйырымды биреп түләнек, яҙылғандыр.

Шкуратов. Да, яҙылған, тик ул булды биш былтыр. Һәм ҡайҙа йәнә ике йөҙ литр һөт, йөҙ алтмыш күкәй, ике кило йөн, бер кило тауыҡ ҡаурыйы, өс дана һарыҡ- кәзә тиреһе? Дөрөҫ, ун биш кило киптерелгән картуф тапшырылған. Башҡаларын да немедленно погасить!

Ғәйникамал. Һыйырым юҡ, тинем дәһә, һөттө ҡайҙан һауайым? Күкәй һалыр, ҡаурыйын йолҡор тауығым да, йөнөн ҡырҡыр, тиреһен тунар һарыҡ-кәзәм дә ҡалманы, барыһы китеп бөттө.

Шкуратов. Ничего не знаю. Йә законды үтә, йә илле һигеҙенсе статья! Уҡып ишеттерәйемме?

Хикмәт. Кәрәкмәй, беләбеҙ.

Ғәйникамал. Тегендә инеп ҡара, биш балам биш таҡтала ҡан ҡоҫоп ята.

Шкуратов. Инмәһәм дә беләмен: колхоз баҫыуынан башаҡ урлап ашатҡанһың. Ошо оғролоғоң өсөн дәүләтебеҙҙең 1932 йыл 7 август ҡарары буйынса һин биш йылға иркеңдән мәхрүм ителергә тейешһең. Өҫтәүенә, минимум хеҙмәт көнөңдө тултырмағанһың, уға ла ҡаты закон бар, вплоть до төрмәгә. Так что, Тоҙтүбә шахтаһында тоҙ киҫергә тәпәй-тәпәй киткең килмәһә, кисекмәҫтән бурыстарыңды погаси, все!

Хикмәт. Һалдат ғаиләһенә законда сигертеү бар.

Шкуратов. Бер ниндәй ҙә һалдат ғаиләһе түгел!

Гөлзәғифә. Бәй, ауыҙыңдан ел алһын, хәләл никахлы Баймый һалдат ҡатыны икәнен ил белә.

Шкуратов. Уның ҡарауы дәүләт белмәй, иптәш Сталин белмәй. Сөнки дәүләт кәнсәләрендә ундай никах теркәлмәгән.

Ғәйникамал. Ижаб ҡабул уҡытып, мулланан теркәттеләр ҙәһә.

Шкуратов. Льготаны шул муллағыҙҙан һора. Әммә дәүләтебеҙ ҡаршыһында, иптәш Сталин ҡаршыһында һин һуғышҡа киткән һалдат ҡатыны түгел. Йә түләйһең, йә геүләйһең Тоҙтүбә яғына ҡарап.

Йырлай-йырлай Шәйәхмәт инә:

Һыйырыңды һалымға һал,
Алып ебәр кәзәкәй.
Һауһаң – һөтө, һуйһаң – ите,
Налогы ла бәләкәй, --

шулаймы, иптәш Шкурник?

Шкуратов. Был кем? Нисә йәштә? Ниңә һуғышҡа китмәгән?

Хикмәт. Нисә йәштә икәнен шайтан белһен. Аҫҡа киҫелепме, аҙашыпмы, ҡара урман яғынан килеп сыҡҡан аҡыллы Шәйәхмәт был. Йәшен үҙе лә белмәй.

Шәйәхмәт. Шкурат, әллә танымайһыңмы? Иртәнсәк ҡына кәнсәләрҙә аяғыңа баҫтым бит. Йүгерек аяҡлы күрәйөр мин!

Хикмәт. Курьер йәғни.

Шкуратов. Ағас ҡылысты кем бирҙе?

Шәғәли. Ағас түгел – алмас. Сталин бабайҙан алдым.

Шкуратов. Һем... алмас ҡылысың булғас, ниңә һуғышҡа китмәнең?

Шәғәли. Барғайным да, комиссия тигән аҡ халатлы кешеһе, әсәнән тыумаса сисендертеп, бынау нәмәмде *(бот араһын тотоп күрһәтә)* арылы-биреле һелкетеп ҡараны ла, пүләмәтең эшләмәй, тылдағы фронт һалдаты булып ҡал, тине. Иҙиәт тигән шәп исем тағып ҡайтарҙы.

Хикмәт. Идиот тигәнелер.

Шкуратов. Ә тылда эшләйме һуң?

Шәғәли. Нимәм?

Шкуратов. Пулеметың.

Шәғәли. Малсылыҡ фермаһындағы еңгәйҙәрем борғослап ҡараны ла, ходҡа ебәреп булмай, тине. Ә шулай ҙа үҙемә ярап ята.

Шкуратов. Ха-ха-ха!

Шәғәли. Шкурат, ә һинеке эшләйме?

Шкуратов. Эшләтһәң, эшләй.

Шәғәли. Вдовушка еңгәйҙәрҙең ете ҡат шкураһын шуның менән тунайһыңмы?

Шкуратов *(иҙәнгә тибеп)*. Кит, идиот!

Шәғәли. Китәм, китәм. Эш кешеһе мин. Силсәүиттә “злосный недоимщик”тарҙың исемлеген төҙөшәм *(китә).*

Шкуратов. Прохвост! *(Китә).*

Гөлзәғифә. Күтеңә ҡарама көлә! Иншалла, алъйотобоҙ арындыртты.

Ғәйникамал. Күпмегә генә икән? “Злостный недоимщиктарҙың исемлеге” тине бит *(төпкө бүлмәгә китә).*

Төҫө ҡасып, Йәмилә ҡайтып инә.

Гөлзәғифә. Балам, ни булды, дәрестәрең бөттө ләме ни?

Йәмилә. Бөтмәҫ элек тараттым. Мейескә яғылмаған, яҙыу ҡаралары туңа...

Хикмәт. Ҡыҙым, әллә илағанһың инде?

Йәмилә. Иланым шул, атайым.

Хикмәт. Ҡайғырма, өмә яһап утын килтерербеҙ, мәктәпте йылытырбыҙ.

Йәмилә. Эш унда түгел, атай.

Хикмәт. Нимәлә һуң?

Йәмилә *(һулҡылдап).* Үгеҙ күҙле, үҙ һүҙле Байсәләм көн күрһәтмәй.

Хикмәт. Инде һиңә ҡанығамы?

Йәмилә. Дәрес бөтөп балалар таралғайны, күҙен упайтып килеп инде, беләгемдән алды...

Гөлзәғифә. Эй Илаһым, уныһына ни кәрәк тағы?

Йәмилә. Бер бөгөн генә түгел... Ике күҙен тызырайта ла: теләһәң дә, теләмәһәң дә мин һине алам, һин – минеке, тип теңкәмә тейә.

Хикмәт. Килешелгән егетем бар, шуны көтәм, тиһәң ни була?

Йәмилә. Көтә-көтә көтөк булырһың, дивизия ҡырылған, хатта генерал Шайморатов та үлгән, тип йәнде ала.

Хикмәт. Шаҡшыйән! Партияның ҡойроғомон, тигәс тә... мин дә партия ағзаһы, уға ла ғәҙел закон бар! *(Кейенеп сығып китә).*

Гөлзәғифә. Атаһы, абай бул, тотҡан урындан һындырма! Ҡыҙым, ниңә әйттең?

Йәмилә. Оҙаҡ түҙеп йөрөнөм, был юлы йәбешә яҙҙы, көскә сығып ҡастым...

Төпкө бүлмәнән Ғәйникамал атлығып сыға.

Ғәйникамал. Әсәйем! Бер юлы өс бәпескәйем йән биргән... (Үкереп илай).

Гөлзәғифә. *Ләхәүлә...* Аллаһы Тәғәләнең *ләғнәтелер* инде был, гонаһтарыбыҙ өсөн...

## Шаршау

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### 3-сө сәхнә

Шул уҡ өй эсе, Хикмәт, Гөлзәғифә. Хикмәт өҫтәл ҡырында.

Хикмәт. Әбей, Ҡарайғырым болғау һорап сапсыналыр, ашығам. Ҡапҡыларға берәй нәмәң бармы?

Гөлзәғифә. Булмай ни. Бүлше фронтындағы комиссарың Ысталин бабай хәстәрләп ебәргән икмәк.

Хикмәт. Килтермәсе шул мамыҡ жмыхыңды!

Гөлзәғифә. Ярман ярсығы һуғып һындырған тешкәйҙәрең – сәүит ҡуйҙыртҡан тос тимер, рәхәтләнеп, әйҙә, кимер ҙә кимер.

Хикмәт. Ярман илендә сағымда ул жмыхты, таҡта-таҡта килтереп, мейескә яғалар ине. Тереклектең түлен ҡорота, тип, малға ашатмайҙар ине.

Гөлзәғифә. Түлең ҡорор тип ҡурҡаһыңмы? Ҡорорлоғоң ҡалманы...

Хикмәт. Үҙебеҙ белгән комбағыштыҡы ла түгел бит, исмаһам.

Гөлзәғифә. Уны Ысталиның, моғайын, балыҡ мурҙаһына һалалыр.

Хикмәт. Ауыҙ иҙелеп бөттө. Бәҙрәфханала ҡаталағын сығарырға көсәнеп дарман китте. Памушнигым Хөнәфиә ағай әйтә, әбейемдең оса ярығынан сыбыҡ менән соҡоп алдым, ти.

Гөлзәғифә. Ҡайғырма, Ысталиндың ҡорҙашы, әмәле үҙебеҙҙә. Бынан һуң көсәнмәҫһең, ауыҙыңдан кергәне тегенеңдән мылтыҡ көбәгендәгеләй шартлап сығыр *(туҫтаҡта дүрткел киҫәк килтерә, сынаяҡҡа сәй яһай).*

Хикмәт *(кимерекләп).* Һәй маладис әбекәй, һабындай йомшартҡанһың! Нисек уйлап таптың?

Гөлзәғифә. Суйын сүлмәк төбөнә һыу һалып, мейес төбөндә төнәттем. Аша-аша, барыбер түлең юҡ инде.

Хикмәт. Баш та бар икән, әй, үҙеңдә! Ысулыңды Хөнәфиә ағайҙың ҡортҡаһына ла өйрәт.

Гөлзәғифә. Бәхетһеҙҙәр. Бер түгел, һигеҙ ул үҫтереп, игелеген күрмәнеләр. Өсәүһе – фин һуғышында, бишәүһе быныһында... Барыһын һуғыш йотто, Аллаһы Тәғәлә алды.

Хикмәт. Аталары мулла тип торманы шул, ҡөрьәнелхафиз булһа ла... Бер көн конный дворҙа шуны күрәм: мулла ағайыбыҙ Ҡарайғыр ялағандан ҡалған ҡамыр-ҡоморҙо, утлыҡсанан тырнап алып, кеҫәһенә тултыра... Әллә оялышынан, әллә ҡурҡышынан ни эшләргә лә белмәне; өйҙә төхөр ризыҡ юҡ, әбей шешенеп ята, ти. Йоҙаҡлы әрйәне асып, кеҫәһенә бер ҡушустай он һалғас, күҙҙәренән йәш килде...

Гөлзәғифә. Һантый, шул ононңдан үҙебеҙгә лә бер-ике ус ҡармаһаңсы, исмаһам.

Хикмәт. Әбей, ни һөйләйһең?! Ҡыҙыл партизан, коммунист башым менән... Маршал Буденныйҙың махсус иҫәбендә торған "Ҡыҙыл Армия генофонды" Ҡарайғыр өлөшөнә керергәме?!

Гөлзәғифә. Шул Буҙунный Ҡарайғыры тип аҫҡа үлергәме...

Хикмәт. Хөнәфиә ағайҙы әйтәм, Сталиндың сәйәсәте һаман ошолай барһа, Ҡарайғырҙың үҙен һуйып ашарға тура килмәгәйе, тип һалдырҙы...

Гөлзәғифә. Сеү! Үҙең нимә тинең һуң?

Хикмәт. Оҙонға ебәрмәнем, әйткән береңде ҡырҡ ҡолаҡ тыңлап тора бит.

Гөлзәғифә. Упалнамус Байсәләм ишетә күрмәһен, ике аяғыңды бер ҡуныҫҡа тығып, муллаң менән ҡушарлап яуапҡа тарттырырҙар. Теге көндә Йәмиләбеҙҙе ҡурсалап боғаҙынан алғанһың, бер юлы шуның ҡонон ҡайтармаҫ, тимә.

Хикмәт. Таяйым, Ҡарайғырым мине юғалтып бышҡыра *(китә).*

Гөлзәғифә. Эй һантый, һаҡал-мыйығың ҡыуарғансы аҡыл кермәне... Колхоз эше, тип йөрөп, күтеңә кейер алмаш ыштаның да ҡалманы, барыһы йыртыҡ-мыртыҡ, ямау һалып бирәйем *(яманырға ултыра, ишек шаҡыйҙар).*

Байсәләм *(аҙыраҡ ҡыҙмаса).* Мөмкинме?

Гөлзәғифә. Ә, упалнамус үҙе икән. Әйҙүк-әйҙүк!

Байсәләм *(екереп).* Һаумы, ҡарсыҡ?

Гөлзәғифә. Ниңә аҡыраһың? Һауғайным да – түгелде.

Байсәләм. Был ни тигән һүҙ, ҡарсыҡ?

Гөлзәғифә. Һауытым ярсыҡ-йорсоҡ.

Байсәләм. Шуны ямайһыңмы?

Гөлзәғифә. Ямайым, өҙөлгәнен ялғайым.

Байсәләм. Ҡартласыңдың көрәп алғаны ыштанға ла етмәйме?

Гөлзәғифә. Ҡайҙан етһен, тапҡан берен эт ейгәс.

Тышта йыр – алйот Шәғәли йырлай, әбей кеткелдәп көлә:

Совхоз ҡаҙала микән,
Колхоз тарала микән?
Ҡапҡа һайын упалнамус –
Эттән ярала микән?

Байсәләм *(аяҡ тибеп).* Һәй шаҡшы, сучьий сын! Кәрәгеңде бирәйем! *(Тышҡа ташлана, унда екеренеү, Шәғәлиҙең сарылдап илауы. Кире инә).* Ҡолағын борҙом тегенең!

Гөлзәғифә. Колхозсының ҡолағын да, тороғон да боропмо-бораһығыҙ, өҙөлөр был бер заман, тимәйһегеҙ... Сәүит власы бармы ул, әллә юҡмы?

Байсәләм. Совет власы булмаһа, әллә ҡасан уҡ аяҡ һуҙып, ауыл осондағы теге донъя ожмахында ыуалып ятыр инегеҙ.

Гөлзәғифә. Теге донъя ни ҙә был донъя ни – беҙҙең өсөн барыбер ыуалыу, айырмаһы тойолмай.

Байсәләм. Контра һөйләйһең, ҡарсыҡ! Ғаиләгеҙ менән контра!

Гөлзәғифә. Бәй, ни һүҙ был?! Үҙең әйтмешләй, ғаилә бында при чем?

Байсәләм. При том, барсағыҙ бер буҡлы сыбыҡтан ҡыуылған. Ҡартыңды әйтеп тә тормайым, уҡытыусы ҡыҙығыҙ...

Гөлзәғифә. Уҡытыусы ҡыҙыма тел тейҙермә!

Байсәләм. ...иптәш Сталин үҙе хуплаған изге ҡанунды боҙа.

Гөлзәғифә. Ҡайһылайтып боҙа?

Байсәләм. Ниңә ҡыҫыр йөрөй? Бала тапмай?

Гөлзәғифә. Әстәғәфирулла тәүбә! Йәрәшелгән Хәсәнен, ҡушылмаҫтары элек үк, кем һуғышҡа алып китте? Һеҙ! Фактически һалдат ҡатыны бит ул.

Байсәләм. Загс бюроһында никахтары теркәлгәнме?

Гөлзәғифә. Өлгөрмәнек, әйтеп торам дабаһа.

Байсәләм. Никахтары булмағас, һалдат ҡатыны булып һанала алмай. Иптәш Сталин законына ярашлы, егерме йәштән бала табырға тейеш.

Гөлзәғифә. Законығыҙ ҡороғоро! Ысталин иптәшкә шулай зерә лә кәрәккәс, ул баланы үҙемдән таптыртығыҙ.

Байсәләм. Ҡырҡ биш йәштән һуң законда ҡаралмаған.

Гөлзәғифә. Йәл, үтә йәл!

Байсәләм. Нимә йәл?

Гөлзәғифә. Әгәр һикһән йәшкә тиклем ҡаралһа, минме-мин!..

Байсәләм. Ҡыҙыңа әйт: бала тапмағаны өсөн жалунъяһының сиреген налог итеп түләргә теләмәһә, тиҙерәк кейәүгә сыҡһын.

Гөлзәғифә. Бәй, һуғыштағы Хәсәненәме?

Байсәләм. Бына, мәҫәлән, миңә!

Гөлзәғифә. Мылтығын тотоп шул Хәсәне ҡайтып төшһә, нишләрһең?

Байсәләм. Көтмәгеҙ, ҡайтмаясаҡ.

Гөлзәғифә. Әүлиәме әллә һин?

Байсәләм. Хәсәнегеҙ хеҙмәт иткән дивизияның хәле мөшкөл. Ҡартың менән бер аүыҙҙан димләгеҙ, күндерегеҙ. Ауыҙ-мороно балда-майҙа булыр, үҙегеҙгә лә, аҡмаһа ла, тамып торор.

Гөлзәғифә. Шуның өсөн килдеңме?

Байсәләм. Шуның өсөн.

Хикмәт ҡайтып инә.

Хикмәт. Һе, саҡырылмаған ҡунаҡ?

Гөлзәғифә. Бабай! Телеңде...

Хикмәт. Былай ҙа тешләп йөрөйөм. Хуш килдең, иптәш уполномоченный. *(Сисенеп, өҫтәл ҡырына урынлаша).*

Байсәләм. Бәлки, табыныңа алырһың? Яғамдан алғаныңдай.

Хикмәт. Хе!

Гөлзәғифә. Бабай, фелләгәнде килтерәм.

Хикмәт. Ярай, булған да бөткән. Урыҫтар әйтмешләй, иҫкене иҫләгәндең күҙе – вон! Рәхим ит, түрә *(ултырышалар).* Килгән ике аяҡлыны буш сығарып булмай ҙа *(фелләгәне аса).*

Байсәләм. Нимә был?

Хикмәт. Былмы? Ярман һуғышы әсирлегенән алып ҡайтҡан ҡәҙерле ҡомартҡым – алман һалдатының поход фелләгәһе. Граждандар һуғышында ла үҙем менән бергә йөрөнө.

Байсәләм. Иптәш Сталиндың ординарецы булғанһың, иптәш Сталин менән сәкәштереп эскәнһең, тип һөйләйҙәр – ысынмы шул?

Хикмәт. Әлбиттә, ысын. Тик был фелләгәнән түгел, ә Иосиф Виссарионовичтың затлы шарап шешәләренән. Йоҡо алдынан стакан тултырып сәкәштерергә ярата ине.

Байсәләм *(туҫтаҡҡа төртөп).* Был нимә?

Хикмәт. Хе-хе! Район гәзитәһендә үҙең үлтереп маҡтаған мамыҡ жмыхынан рәхим ит.

Байсәләм. Һаулыҡ өсөн ифрат файҙалы аҙыҡ. Тик мин эскәндә ҡапмайым *(туҫтағанды этәрә).* Беләһегеҙме, Кремлдә иптәш Сталин, үҙенең көндәлек икмәк паегын фронтҡа оҙатып, ошоноң менән туҡлана.

Гөлзәғифә. Ҡаталаҡламай ҙамы?

Хикмәт. Әбей, даһиҙар ҡаталаҡламай *(фелләгәнең бормасына тултырып, табындашына һона).* Әләйһә, бынын кутәреп ебәр. Ярман-яуыз һауыты булһа ла, эсендә урыҫ араҡыһы.

Байсәләм. Кәрәкмәй!

Хикмәт. Үҙебеҙҙең урыҫ араҡыһы, тим бит. Улай ғына ла түгел: Ырымбурҙағы өскөл һаҡаллы профессор ҡорҙашым бүләк иткән ут-спирт. Польша фронтында бергә булғайныҡ.

Байсәләм. Фашист һауытынан эсергә, башыма тай типмәгән!

Хикмәт. Ярай, янға ҡалыр. *(Соҡортайҙы тамағына ҡаплап).* Әбей, алып ҡуй ҡомартҡыны *(йәһәт үтәлә)*.

Байсәләм. РККА генофонды Ҡарайғырҙы аҙна буйына помощнигың Хөнәфиә сукин сынға ҡалдырып, тимәк, Ырымбурҙа типтерҙең?

Хикмәт *(хәмер башына ҡабып).* Ҡаты ҡуллы булһа ла, йомарт холоҡло ғәҙел комиссар ине, иптәш Сталинды әйтәм.

Байсәләм. Ниңә "ине"? Ә хәҙер ғәҙел түгелме?

Хикмәт. Йәшерен-батырыны юҡ – ғәҙеллек етеңкерәмәй. Сәйәсәттә ебәрелгән хаталарҙы таныу юҡ. Һин, мин – икебеҙ ҙә ВКП(б) ағзаһы, "Правда"ны ентекле уҡып барабыҙ – тураһын әйтергә кәрәк.

Байсәләм. Тураһы нимәлә?

Хикмәт. Тураһы... *(Шкафтың аҫҡы бүлкәһенән "Правда" гәзите төпләмәһен ала, өҫтәлгә йәйеп һалып аҡтара)*. Бына иптәш Сталиндың 1939 йыл 28 сентябрҙә геноссе Гитлер Германияһын Англия империалистарынан ҡурсалап һуҡҡан ихлас вәғәҙәле телеграммаһы *(сәхнә түрендәге экранда ике илдең юлбашсылары үҙ-ара алышҡан тәбрикнамәле "Правда" гәзитенең бите)*:



ПРАВДА

23 ДЕКАБРЯ 1939 г., № 353

**ПРИВЕТСТВИЯ ИНОСТРАННЫХ ГОСУДАРСТВЕННЫХ ДЕЯТЕЛЕЙ ТОВАРИЩУ СТАЛИНУ**

**Господину ИОСИФУ СТАЛИНУ**

Москва

Ко дню Вашего шестидесятилетия прошу Вас принять мои самые искренние поздравления. С этим я связываю свои наилучшие пожелания, желаю доброго здоровья Вам лично, а также счастливого будущего народам дружественного Советского Союза.

АДОЛЬФ ГИТЛЕР.

**Господину ИОСИФУ СТАЛИНУ**

Москва

Памятуя об исторических часах в Кремле, положивших начало решающему повороту в отношениях между обоими великими народами и тем самым создавших основу для длительной дружбы между ними, прошу Вас принять ко дню Вашего шестидесятилетия мои самые теплые поздравления.

ИОАХИМ ФОН-РИББЕНТРОП
Министр иностранных дел.

**Товарищу СТАЛИНУ.**

Москва, Кремль.

От имени финляндского трудового народа, борющегося рука об руку с героической Красной Армией за освобождение своей страны от ига белогвардейских палачей народа и наймитов иностранных империалистических провокаторов войны, за победу Финляндской независимой демократической республики, Народное правительство Финляндии в день шестидесятилетия со дня рождения Иосифа Виссарионовича Сталина выражает свое глубочайшее уважение великому другу финляндского народа — Сталину, имя которого навсегда останется символом дружбы и братства народов Советского Союза и Финляндии, как и всех народов мира.

От имени Народного правительства Финляндии—Отто КУУСИНЕН.

**Г-ну СТАЛИНУ.**

Искренне Вас поздравляю с исполнившимся сегодня Вашим шестидесятилетием.

Расцвет и прогресс Вашего государства за последние годы достигнуты благодаря Вашему великому руководству. Подобные небывалые успехи вызывают уважение всего мира.

Китай, в настоящее время напрягающий все силы к оказанию сопротивления жестокому врагу для создания государства трех народных принципов, к осуществлению ... мому Вами руководству великими планами строительства государства, к Вашим стремлениям по упрочению мира во всем мире и особенно за Вашу симпатию к нашей войне — сопротивлению, — чувствует особое уважение и признательность.

Представляя всю армию и весь народ Китая, приношу Вам самые горячие поздравления.

ЦЗЯН ЧЖУН-ЧЖЭН
(имя Чан Кай-ши)

Чунцин, 20 декабря 1939 г.

И. В. Сталин (1920 год).
Фото П. Оцупа.

***Гитлер и Сталин - дружеская переписка***
23, 25 декабря 1939 года, газета "ПРАВДА":

Хикмәт *(гәзиттән уҡый).* “Әгәр Германия ауыр хәлдә ҡалһа, ул ышана ала: совет халҡы Германияға ярҙамға киләсәк һәм Германияны быуып ташлауҙарына юл ҡуймаясаҡ. Советтар Союзы Германияның көслө булыуын теләй һәм Германияны ҡолатыуға ҡаршы торасаҡ”. Һәм бына иптәш Сталиндың 60 йәшлек юбилейы айҡанлы геноссе Гитлерҙың һәм уның Сит ил эштәре министры Риббентроптың ҡайнар ҡотлау телеграммалары, шуларға яуап итеп иптәш Сталиндың 1939 йыл 23-сө, 25-се декабрь яуаптары: “Ҡотлауығыҙ өсөн рәхмәт. Советтар Союзының һәм Германияның ҡан менән беркетелгән дуҫлығы оҙайлы һәм ныҡ нигеҙҙәргә эйә”. Бына гүзәл фотоһүрәт *(экранда Молотов менән Гитлерҙың Берлинда дуҫтарса күрешеүе)*:



Пребывание Председателя Совнаркома СССР и Народного Комиссара Иностранных Дел тов. В. М. Молотова в Берлине. На снимке — т. В. М. Молотов и г. А. Гитлер в новой имперской канцелярии. Фото М. Калашникова.

Хикмәт *(дауам итә).* Иптәш Сталиндың тоғро ҡорҙашы Молотовты 1940 йылдың 12 ноябрендә Берлинда Германияның Сит ил эштәре министры фон Риббентроп, фельдмаршал Кейтель, дуҫлыҡ ҡоластарын киң йәйеп, СССР-ҙың “Интернационал” гимнын уйнатып ҡаршылай, ике-ара дуҫлыҡ килешеүе менән Көнсығыш Польша, Вилен крайы һәм Бессарабия ерҙәре СССР-ға беркетелә, ул илдәрҙә беҙҙең файҙаға тап беҙҙекеләй социалистик тормош төҙөү башлана...

Байсәләм. Эйе, именно беҙҙең файҙаға! Башлы ул бөйөк атайыбыҙ Сталин!

Хикмәт. Был дуҫлыҡтың иң юғары нөктәгә ирешеүен дә, гәрсә секрет булһа ла, һин дә, мин дә беләбеҙ: Геноссе Гитлер менән Иптәш Сталин 1940 йылдың 18 үктәбрендә Львов ҡалаһы вокзалында иптәш Сталиндың махсус вагонында осрашып, бөтөн донъя күләмендә бергәләшеп социализм төҙөргә һүҙ ҡуйышҡанын ишеткәс, ҡыуанып бөтә алманым...

Байсәләм. Хәҙер ҙә ҡыуанаһыңдыр...

Хикмәт. Юҡ, хәҙерен ҡыуанмайым. Ләкин ул осорҙа башҡаса инем: ике илдә лә социализм мөхите сәскә атҡанын, дәүләт флагтарыбыҙҙың да бер иш ҡыҙыл төҫтә икәнлеген "Правда"нан уҡып та, киноларҙа күреп тә белә инек. Ул саҡта мин ике юлбашсыны ла хөрмәт иттем...

Байсәләм. Шуға күрә Ҡарайғырҙы Гитлерға бүләк итергә йыйындыңмы?

Хикмәт. Аб-ба, ҡайҙан соҡоп сығарҙың?

Байсәләм. Беҙ ҡапсыҡта ятмай бит. Помощнигың Хөнәфиә сукин сындың, тормошонан зарланып, жалыу менән районға барғанын, шунда иптәш Сталинға тел тейҙергәне өсөн ҡулға алынғанын белмәйһеңме ни? Эше уның НКВД-ла.

Гөлзәғифә. Ләхәүлә! Муллаһыҙ ҡалды ауыл...

Байсәләм. Органдыҡылар һорау алған саҡта энәһенән-ебенәсә һүтелгән, исемеңде Гитлерға бәйләп ҡыҫтырған.

Гөлзәғифә. Әстәғәфирулла тәүбә, ит изгелек – көт яуызлыҡ!

Байсәләм. Бүләк хаҡында әйттеңме?

Хикмәт. Мин бит уны иптәш Сталин менән геноссе Гитлер бер туғандай дуҫлашҡандарында әйткәйнем, һуғышҡа тиклем үк биш былтыр.

Байсәләм. Уныһы мөһим түгел, әйтеүең мөһим. башҡа гонаһтарың да баштан ашҡан. Органдар алдында мин быны йә кире ҡағам, йә дөрөҫләйем. Яҙмышың ҡыл осонда.

Хикмәт *(тиҙ айнып).* Ҡарале, нәсәлник, күрәләтә утҡа һалма башымды!

Байсәләм. Быныһы үҙеңдән тора. Майлаған ҡайыштай ишелһәң, бәлки, иш тә итермен үҙеңде *(ишеккә йүнәлә).*

Хикмәт. Китте... Инде нишләргә?

Гөлзәғифә. Ҡарт күҫәк! Һаҡал-мыйығың ағарғансы аҡылға ултырманың, телеңде тыя белмәнең. Бар, алып китмәҫтәре борон аяғына йығыл бәдбәхеттең!

Хикмәт. Йә, хәҙер! *(Ашыҡ-бошоҡ кейенеп китә).*

Шатлығынан елкенгән Йәмилә инә.

Йәмилә. Әсәкәйем, һөйөнсө, һөйөнсө! Изге хәбәр!

Гөлзәғифә. Һуғыш бөткәнме?

Йәмилә. Хәсәнемдән ҡош телендәй хат килде, хат! *(Өскөл хатты башы өҫтөндә уйнатып бейей).*

Гөлзәғифә. Нимә тигән?

Йәмилә. Сталинградтан һуң көнбайышҡа – Донбасҡа табан дөрөп барабыҙ, бик ҙур аэродромлы Морозовская станицаһын алдыҡ, шул һуғышта Язарый ағай фашист генералын үлтерҙе, секретный ҡағыҙҙары ҡулға төштө. Ошо батырлығы

өсөн командирыбыҙ Шайморатов Язарый абзыйыма рәхмәт әйтеп, тыуған илгә ҡайтып әйләнер өсөн өс көнлөк ял бүләк итте, көтөгөҙ, тип яҙа.

Гөлзәғифә. Иншалла, тере сағыбыҙҙа күреп ҡыуанабыҙ икән ғәзиз улыбыҙҙы! *(Доға ҡыла).* Үҙеңдеке һуң, Хәсәнең, тим?

Йәмилә (өскөл хатты фрау Гретхен портретының урамына ҡыҫтырып). Алға барабыҙ, тигән. Әсәй, ашығам, ҡыҫҡа тәнәфескә сыҡҡайным. Абзыйым ҡайта, абзыйым ҡайта! *(Йүгерә).*

Гөлзәғифә. Фәрештәнең амин тигәненә тап килеп, Хәсәнең дә иҫән-аман ҡайтһын бер үк *(доға ҡыла).* Изгеләрҙән-изге хәбәр! Ғәйникамал ҡыҙым да бер ҡыуанһын *(төкө бүлмәгә китә).*

Шомторайып Хикмәт ҡайтып инә, Гөлзәғифә сыға.

Гөлзәғифә. Йә, ҡыуып еттеңме мөртәтте?

Хикмәт. Уртаҡ тел табып булманы.

Гөлзәғифә. Нимә ти?

Хикмәт. Ҡыҙыңды бирһәң генә, ти.

Гөлзәғифә. Ә һин?

Хикмәт. Мин ни... Дивизия ҡырылған, тиһәләр ҙә, үле ҡағыҙы килмәгән. Хәбәр килеүен көтәйек, тип әйтеп ҡараным.

Гөлзифа. Ә ул?

Хикмәт. “Бирһәгеҙ ҙә, бирмәһәгеҙ ҙә алам, Йәмиләгеҙ минеке!” – тип янаны.

Гөлзәғифә, өндәшмәй, төпкө бүлмәгә китә. Хикмәт тәүҙә – Сталин, шунан Гретхен портреттары ҡаршыһына килеп һөйләнә.

Хикмәт. Шулай эштәр, ҡәҙерле иптәш Сталин. Шундай хәлдәр, һөйөклө фрау Гретхен. *(Портрет урамына ҡыҫтырылған өсмөйөшлө хатты тартып сығара, асып уҡый).* Ур-ра! – улым ҡайта! Язарыйыбыҙ ҡайта! *(хатты юғары һелкеп, туйтаңдап бейей).* Әбешкән, килтер әле феләгәне!

## 4-се сәхнә

Шул уҡ өй, ығы-зығы, бына-бына Язарый ҡайтып инәсәк. Хикмәт, мыйығын тырпайтып, өҫтәл ҡырында ултыра; Гөлзәғифә усаҡ тирәһендә булаша, Йәмилә баҫып тора.

Йәмилә. Уф йөрәккәйем, Язарый абзыйым бына-бына ҡайтып инәсәк! Апайым, сыҡ инде!

Ғәйникамал *(төпкө бүлмәнән сыға).* Ике ҡолонсаҡҡайымды һөт эсереп йоҡлаттым. *(Һулҡылдап).* Өсөһө йоҡлай гүрҙә...

Йәмилә. Апаҡайым, ошо изге сәғәттә лә...

Ғәйникамал. Эй һылыуым, үҙең бала табып күрмәгәс, белмәйһең шул *(усаҡ янына бара)*. Әсәй, ҡанә ярҙамлашайым.

Гөлзәғифә. Эй ҡыҙым, ярҙамлашаһы юҡ инде. Ярай, һылыуыңдың былтырғы мәктәп паегынан аҙыраҡ он һаҡлап тотҡайным. Ҡаҙан төбөндә ҡатырмаҡ ҡатырып алайыҡ.

Йәмилә. Әсәй, Алһыу әхирәтем абзыйымды миңә ҡарағанда ла өҙөлөп көтә, саҡырып киләйемме?

Гөлзәғифә. Сабыр ит. Абзыйың ҡайтып кергәс, баш-күҙ алғас, барып һөйөнсөләрһең.

Ғәйникамал. Улар, моғайын, Хәсән менән һинең кеүек бешмәгән йән булмаҫ, туй яһамай уҡ ҡушылыр. Алһыу әхирәтең, тим.

Йәмилә. Абзыйым, тим, Хәсәнемдән сәләм килтерерме икән?

Хикмәт. Килтерер, ниңә килтермәһен. Бергә киттеләр, бергә хеҙмәт итәләр.

Йәмилә. Шундайын ныҡ һағындым, һағындым, -- йөрәгем өҙөлөп бара!

Гөлзәғифә. Ҡыҙым, улай ныҡ өҙәлнмә, өҙләгеп ҡуймағайың.

Йәмилә. Уф, үләм! Ниңә туйҙы көттөрттөгөҙ?! *(Һулкылдай).*

Ғәйникамал. Хәсәнеңә үпкәлә. Был көндә инде бала әсәһе булыр, "за бездетность" налогына ла тарымаҫ инең.

Хикмәт. Ҡуйығыҙ, иҫкә төшөрмәгеҙ шуны.

Ғәйникамал. Атаҡайым, нисек иҫкә төшөрмәйем? Рифҡәт тигән йолҡош фининспекторҙары саҡыртып йәнемде алды: биш балаң теүәлдә налог түләтмәй инең, инде икәүгә ҡалғас, ун биш процентын ҡайырып алабыҙ – Сталин законы, ти.

Хикмәт. Телләшмә, түләрһең.

Ғәйникамал. Ҡайҙан табып түләйем? Башҡа налогтары ла кәбәндәй өйөлгән. Сығарып ҡына һатырға мал-тыуар юҡ.

Тышта йыр – Алъйот Шәғәли йырлай:

Кемдән күпме түләтергә<br>
Ысталин бабай белә.<br>
Өҫтөңдә туның ҡалмаһа,<br>
Бетеңде һатып түлә!

Хикмәт. Һәй ахмаҡ, телеңә абынып йығылғыры!

Гөлзәғифә *(тәҙрәгә төбәлеп)*. Әнә-әнә ҡарағыҙ: Каирский хуторҙағы Бауыл ызнакумдың кашауай санаһы уҙып бара, беҙҙең тәңгәлдә береһе төшөп ҡалды.

Йәмилә. Абзыйым! Абзыйым! *(Атлығып сығып китә, энәнән-ептән лейтенант формаһы кейенгән, биленә кобуралы пистолет таҡкан Язарый менән ҡосаҡлашып килеп инәләр, күңелле шау-шоу, ҡосаҡлашып күрешеүҙәр).*

Язарый. Алһыу әхирәтең иҫәнме?

Йәмилә. Иҫән, иҫән! *(Сығып йүгерә).*

Хикмәт. Эй бала, бала!

Язарый *(вещмешогынан бүләктәр сығара-сығара).* Бына һиңә, әсәкәйем, үҙең яратҡан ҡыҙыл француз яулыҡ. Ғәйникамал апайыма зәңгәр шәл...

Хикмәт. Трофеймы?

Язарый. Үҙеңә мәғлүм, атай... Ә быныһы Йәмилә һеңлемә ебәк күлдәк, ҡайҙа әле ул?

Ғәйникамал *(күлдәкте алып).* Алһыуыңды һөйөнсөләргә йүгерҙе, ҡайтыуы менән үк, теге бүлмәгә кереп, кейеп тә алыр.

Язарый. Ә быныһы, Ғәйникамал апайым, яратҡан ҡусты-һеңлеләремә һалдат паегынан тәмлекәс – киҫәкле бер ҡап шәкәр, бишеһе тиң шапылдатып һурһындар.

Ғәйникамал. Бишәүһе, тиһең дә ул... рәхмәт *(күҙ йәштәренә төйөлөп шәкәрҙе ала).*

Язарый. Ике бөкәнкә икмәк, быныһы ла һалдат паегы *(өҫтәлгә ҡуя).* Атай, алман илендә әсирлектә йөрөп ҡайтыуыңды хәтерләтергә һиңә лә бер ҡомартҡы – Морозовская станицаһында ҡара-ҡаршы һуғышҡанда минең пуләнән ауған фашист генералының кокардалы фуражкаһы *(ҡарттың башына кейҙертә).* Ҡайһылай ҙа килешә! Ҡойоп ҡуйған генерал!

Хикмәт. Әбей, күрҙеңме -- генерал ҡатыны һин хәҙер! *(Сыулап көлөшәләр).* Ултыр, улым.

Язарый *(түҫтәктәге жмыхҡа иғтибар итеп).* Әсәй, был ни? Кирбес киҫәгеме, тиһәм...

Гөлзәғифә. Ысталин бабаң үҙе яратып ашай торған икмәк ул, балам. Мамыҡ жмыхы, тиҙәрме шуны...

Хикмәт. Хе-хе! Үҙебеҙҙекенән бүгеп, Ташкенттыҡын ғына ашайбыҙ. Тылда ла фронт хәҙер.

Язарый. Беҙгә фронтта ысын икмәк бирәләр, ҡанға мансып булһа ла...

Хикмәт. Унда ғына түгел – бында ла халыҡ ҡырыла. Ғәйникамал апайыңдың өс сабыйын ерләнек.

Язарый. Колхоз идараһынан он яҙҙыртып алырмын.

Хикмәт. Йөрөмә. Колхоз келәттәре – шомотор, бөтәһе лә көнбайыштағы фронтҡа, тип йәшәйбеҙ.

Йәмилә менән Алһыу инә, Алһыу һөйгәненең ҡосағына ташлана, өйҙәгеләр быны ҡыуанып ҡарап тора.

Алһыу. Һағынысым, берҙән-берем!

Язарый. Алһыу алмаҡайым, һине күреп туймамын!

Йәмилә. Бәхетлеләр!

Алһыу *(иҫен йыйып).* Күрешеүе бәхет тә ул, хушлашыуы аяныс... өс көнлөк кенә бәхет...

Язарый *(йырлай):*

Алһыу алмам, һинән ҡалмам,
Һин ҡайҙарға барһаң да.

Алһыу:

Йәлләйем йәш башҡёайымды,
Йәшләй уттарға һалһам да...

Язарый, Алһыу:

Йәлләйем йәш башҡайымды,
Йәшләй уттарға һалһам да... *(Үбешәләр, Язарый ҡыҙға кескәй ҡап бирә).*

Язарый. Алһыу алмаҡайым, һиңә француз хушбуйы.

Алһыу *(бүләкте еҫкәп).* Уй рәхмәт, йәннәт еҫтәре аңҡый!

Шул арала Йәмилә төпкө бүлмәнән бүләк күлдәкте кейеп сыға.

Йәмилә. Рәхмәт, абзыҡайым, килешәме?

Алһыу. Ух! Әхирәткәйем!

Язарый. Һылыуым, һиңә килешмәгән нәмә бармы икән? Һин үҙең килештерәһең!

Алһыу. Их, ошо мәлдә үҙеңде Хәсәнең күрһен ине!

Йәмилә. Абзыйым, Хәсәнем сәләм әйттеме? Күрҙеңме?

Язарый. Ғәфү ит, һеңлекәйем, бер ай буйы госпиталдә ярамды яматып ятып, күрмәй ҡалдым, уларҙың дошман тылына рейдҡа кереп киткәндәрен генә ишеттем.

Хикмәт. Дивизия ныҡ ҡыйралған, Шайморатов генерал да һәләк булған, тигәндәре дөрөҫмө?

Язарый. Дөрөҫ шул, атайым *(үкһеп илаган Йәмиләне ҡосаҡлай).* Илама, һеңлекәйем, иҫән-амандыр Хәсәнең. Дивизияның бер өлөшө ут ҡулсаһын йырып сыҡҡан, дошман тылында партизан булып тороп ҡалғандары ла бар, тинеләр. Хәсәнең шул иҫәндәр араһындалыр.

Гөлзәғифә. Барыһы ла Раббыбыҙ ҡулында *(дога ҡыла).*

Алһыу. Әхирәткәйем! *(Йәмиләне ҡосаҡлай).*

Йәмилә. Үлмәгән ул, үлмәгән! Хәсәнкәйем үлмәгән!

Язарый. Әйтеп торам даһа!

Шәғәли инә.

Шәғәли. Күрәйөр килә, күрәйөр! Гражданка Аралбаева Ғәйникамал, гражданка Аралбаева Йәмилә, икегеҙҙе лә хәҙер үк силсәүит кәнсәләренә саҡырталар. Нимитленне йәвитсе булһындар, тип, упалнамус үҙе ажғырып ҡалды.

Ғәйникамал. Һеңлем, бәләһенән баш-аяҡ, барып йәвитсе булайыҡ.

Язарый. Күргәндәй ҙә булайыҡ, туҡтағыҙ!

Хикмәт. Һис туҡтатырға ярамай, бында ла фронт, тинем бит. Тәпәйләгеҙ, ҡыҙҙарым.

Алһыу. Киттек, әхирәтемдән ҡалмайым. *(Китәләр).*

Гөлзәғифә. Оҙаҡламағыҙ, табын етештерәм.

Шәғәли. Язарый абзый, алмас ҡылысым һынды, билендәге алтатарыңды миңә бир.

Язарый. Бирер инем дә бит, үҙемә кәрәкле шул. Һуғышҡа кире китеп, фашистарҙы атырға.

Шәғәли. Мин бындағы фашисты атыр инем.

Язарый *(көлөп).* Бында ла фашист бармы ни, кем ул? Әллә Гитлер килгәнме?

Шәғәли. Гитлерҙың һыңары ул, упалнамус Байсәләм.

Язарый. Упалнамус йөрөһөн, ә Гитлерҙың үҙен дә, һыңарын да үҙем атырмын. Килештекме?

Шәғәли. Килештек, әләйһә. Анау икмәгеңдән бер телем бир ҙә, китәйем. *(Язарый икмәк телеп бирә).* Мин барҙа һин бирешмә, фашистарҙы гөпөлдәт.

Язарый. Ярай, ҡустым.

Шәғәли. Эштәрем күп *(китә).*

Хикмәт. Ҡыйыш мөрйә!

Язарый. Төтөнө тура йөрөй. *(Фрау Гретхен портреты янында туҡтала, нык текләй).* Атай, кем был? Таныйым да һымаҡ. Мин күреп белмәгән ханым.

Гөлзәғифә. Уның ҡарауы атайың күреп белгән. Ярман пленында алған ҡатыны ул.

Язарый. Был ни хәл, исеме кем?

Хикмәт. Фрау Гретхен, улым.

Язарый (*түш кеҫәһенән ике фото сығарып).* Ошомо?

Хикмәт. Ошо. Өлкәнәйгән фрау Гретхеным... Ҡайҙан алдың?

Язарый. Ә быныһын таныйһыңмы? Башыңдағы фуражканың эйәһе.

Хикмәт. Бәй-бәй, ҡойоп ҡуйған һин дә мин бит был! Исеме?!

Язарый. Һанс Һикмут тип яҙылған фото артына. Ә фрау Гретхендыҡында: “Ҡәҙерле улым Һанс Һикмутҡа һөйөклө әсәһенән”, -- тигән бағышлау. Шул “Һикмут”тан һағайып, үлтерелгән генерал кеҫәһендәге фотоларҙы үҙемдә ҡалдырғайным...

Хикмәт. Был ни булып сыға тағы?

Язарый. Һанс Һикмут тигәндәре – үҙебеҙсә Һәнес Хикмәт тигән һүҙ.

Хикмәт. Я Раббым, улым менән ҡатыным булып сығамы?!

Гөлзәғифә. Ғибрәт! Мәсхәрә!

Хикмәт *(башын тотоп).* Я Раббым, ниңә иртәрәк үлмәнем?!

Язарый *(күҙ йәштәренә төйөлөп).* Һинең ғәзиз улыңды – үҙемдең бер туған абзыйымды бына ошо ҡулдарым менән атып үлтергәнмен, атайым... *(Ҡосаҡлашып илайҙар).*

## 5-се сәхнә

Ауыл советының ҡабул ҡылыу залы, түрьяҡ стенала иптәш Сталиндың 1920 йылда аяғөҫтө баҫып төшкән оло портреты:



И. В. Сталин (1920 год).
Фото П. Оцупа.

*Ҡыҙыл япҡан оҙон өҫтәл ҡырында, ҡултыҡ таяҡтарын өҫтәлгә һөйәп, ауыл советы рәйесе Хәким, ВКП(б) район комитеты уполномоченныйы (упалнамус) Байсәләм, халыҡтан һалым аҡсаһы һыҙырыусы фининспектор Рифҡәт шул йәһәттән ҡаҙнаға бурыслыларҙы "бер таҡтаға баҫтырыр" алдынан фекер ҡороп ултыра.*

Рифҡәт. Ауыл йолҡоштары налогтарын йә тулыһынса түләмәгән, йә өлөшләтә генә түләп күҙ буяған. Злостныйҙарҙан недоимкаларын таптырта-таптырта өйҙән-өйгә темеҫкенеп йөрөп йөҙ һыуым, аяҡтарым ҡалманы.

Байсәләм. Преступная халатность. Был эште фронт шарттарына яраҡлы көйләү урынына, бына был иптәш -- ауыл советы председателе ниңә йоҡлай?

Хәким. Йоҡо ҡайғыһы юҡ, һыңараяҡ һайыҫҡандай ырғаңдайым.

Байсәләм. Ырғаңдағас, ниңә злостный недоимщиктарың үрсей? Былтыр ғына иптәш Сталин үҙе ҡул ҡуйған военный налог ҡарары ла йөҙ процентҡа үтәлмәгән, халыҡ заемға яҙылмай?

Хәким. Халыҡтың хәле йөҙ процентлы түгел шул. Ауыҙын асһа, үпкәһе күренеп тора.

Байсәләм. Ә һин үпкәһен йолҡоп ал, нечего церемониться.

Рифҡәт. Дөп-дөрөҫ. Иптәш Сталин ундайҙарға ҡарата ҡаты ҡуллы булырға бойора.

Хәким. Ҡустым, ҡауырһының да ҡатмаған, ҡаты ҡуллы булырға саҡыраһың. Күпме бала-саға гүр эйәһе булғанын, ҡарт-ҡоро астан шешенгәнен беләһеңме?

Рифҡәт. Беләм. Ләкин был беребеҙгә лә йомшаҡ ҡуллы булырға хоҡуҡ бирмәй.

Хәким. Бик шәп икәнһең -- ҡаты ҡуллылығыңды, киләһе йыл йәшең етеп фронтҡа барғас, ҡылыс һелтәп күрһәтерһең.

Байсәләм. Председатель иптәш, прекратить! Фронтовик башың менән контрпродуктивно һөйләйһең. "За Родину, за Сталина!" тип атакаға кем барҙы?

Хәким. Беҙ барҙыҡ.

Байсәләм. Шулайғас?

Хәким. Ғәфү ит, контузия... "За Родину!" тигәнде хәтерләйем, "За Сталина!" тигәнен онотҡанмын.

Байсәләм. Онотторға тейеш түгелһең: Ҡыҙыл Армия Политуправлениеһы начальнигы Мехлис иптәш үҙе ижад иткән, Политбюро хуплаған яугир оран ул.

Рифҡәт. Һин, ағай кеше, әллә юҡһа "Правда"ны уҡымайһыңмы?

Хәким. Уҡыйым, уҡымаған ҡайҙа ул.

Рифҡәт. Шул оран менән Зоя Космодемьянская йәнен биргән, Александр Матросов фашист амбразураһын күкрәге менән ҡаплаған.

Байсәләм. Значит, иптәш Мехлис оранын бында ла һөрәнләргә! Бында ла фронт!

Хәким. Эйе, фронт. Унда ни, бында ни – халыҡ себендәй ҡырыла.

Байсәләм. Беләһеңме ауыҙың ни һөйләгәнде?

Хәким. Беләм.

Байсәләм. Ҡаныңды ҡойоп ҡайтҡан фронтовик булмаһаң, ике аяғыңды бер ҡуңысҡа тығыр инем.

Хәким *(ҡултыҡ таяғын иҙәнгә туҡылдатып).* Һыңарын ҡайҙан алырһың?

Рифҡәт. Ха-ха-ха!

Байсәләм *(өҫтәл һуғып).* Прекратить! Эшкә күсәйек. Злостный недоимщиктар саҡыртылдымы?

Рифҡәт. Тәғәйенләнгән өсәү күрше бүлмәлә көтә.

Байсәләм. Милиционер ҡайҙа?

Милиционер *(ишек төбөндә шыҡайып).* Мин бында.

Байсәләм. Яҡшы. Тоҙтүбә шахтаһында тоҙ сабыусылар үҙ теләктәре менән фронтҡа киткән, эшләрҙәй кеше ҡалмаған. НКВД начальнигы Лаврентий Павлович Берия иптәштең разнарядкаһына ярашлы, был ауылдан иң злостный өс недоимщик немедленно китергә тейеш! Керетегеҙ берәмләп.

Ғәйникамал керә.

Рифҡәт *(исемлеккә ҡарап).* Аралбаева Ғәйникамал, очень-очень злостная недоимщица. Йорт-ере өсөн налогты, военный налогты түләмәгән, заемға яҙылмаған, за бездетность түләүҙән дә баш тарта -- ике генә балаһы булғаны, дүрткә тулмағаны өсөн тейешле процент һалымды инҡар итә.

Ғәйникамал. Биш баланың өсөһөн гүргә һалдыртканығыҙ өсөн, бәлки, миңә үҙегеҙ түләрһегеҙ?!

Байсәләм *(кул һелтәп).* Алығыҙ!

Милиционер *(честь биреп).* Есть алырға! Әйҙә-әйҙә, Тоҙтүбәлә рәхәтләнеп тоҙ яларһың, апаҡай *(төрткөләп оҙата).*

Ғәйникамал *(әйләнеп ҡарап). Дәжжал!* Күҙ йәштәребеҙ төшһөн ҡара башыңа!

Байсәләм. Пш-шел вон!

Сәбилә керә.

Рифҡәт. Туйғарина Сәбилә, бурыстарын ҡырҡ процент ҡына үтәгән, за бездетность түләүҙән дә баш тарта.

Байсәләм. Сәбиләкәй-матурҡай, һаулыҡкайың яҡшымы?

Сәбилә. Зарланмайым.

Байсәләм. Ниңә законды боҙаһың – тупылдатып бала артынан бала тапмайһың?

Сәбилә. Рәхәтләнеп табыр инем дә, Сталинградта ятып ҡалған иремде ҡайтарып бирһәң.

Байсәләм. Ireң бында ни при чем.

Сәбилә. Аһ-аһ, елдән еленләйемме?

Байсәләм. Миңә тимәгәйе эттән еленлә, әммә бала тап!

Сәбилә *(атлығып килеп Байсәләмдең муйынына аҫылына).* Иң шәп эт – һин, дауай, әләгешәйек! *(Айпалашалар, Рифҡәт менән милиционер көскә айыра, Хәким шым көлөп ултыра).*

Байсәләм. Күҙ алдымдан долой кәнтәйҙе!

Милиционер. Есть! *(Ләгнәт яуҙырып сарылдаған ҡатынды ишектән елтерәтә).*

Байсәләм *(өҫ-башын ипкә килтереп).* Нәүбәттәген!

Гөлсәсәк инә.

Рифҡәт. Баллыҡаева Гөлсәсәк. Исеме баллы булһа ла, есеме бик әскелтем. Ошоғаса итен дә, һөтөн дә, күкәйен дә, йөнөн дә, тиреһен дә тапшырмаған. Заемға яҙылмаған, за бездетность бурыслы.

Гөлсәсәк *(сиратлап осаһына, түшенә һәм башҡа урындарына бармаҡ төртөп).* Алығыҙ бына итемде, һауығыҙ һөтөмдө, тунағыҙ тиремде. Үҙем күкәй һалырға өйрәнмәгән, йөнөм үҫеп етмәгән.

Рифҡәт. Хөкүмәткә, һинең түгел, ә һыйырыңдың һөтө, быҙауыңдың ите, һарығыңдың йөнө, кәзәңдең тиреһе, тауығыңдың күкәйе кәрәк. Аҡсалата хужалыҡ налогың да ҙур.

Гөлсәсәк. Миңә ниндәй хужалыҡ налогы булһын?

Рифҡәт. Апаҡай, ҡолағыңа күпме тизып туҡыным, аңларға теләмәйһең. Серегән бай һин хәҙер!

Гөлсәсәк. Эйе шул: ҡашым да күҙем, фәләнсәм дә үҙем – бына бөтә байлығым.

Рифҡәт. Йорт-ерендән алынған йыллыҡ килемеңде исәпләп ҡараныңмы?

Гөлсәсәк. Бигәләш, исәпләргә һин бар бит!

Байсәләм. Тағы ла бер тапҡыр туҡып бир несознательная гражданкаға.

Рифҡәт. Бөйөк атайыбыҙ Сталин законы буйынса, бөгөнгө көндә һин хужалығыңдағы һәр тармаҡтан ошондайын йыллыҡ килемдәргә эйә: йортоң билгән ереңдең һәр сутыйынан – 40 һум тип исәпләһәк, фактический 20 сутыйҙан – 800 һум, картуф баҡсаңдың һәр сутыйынан – 120 һум килем алынғанлыҡтан, 10 сутыйҙан – 1200 һум, гөбөрҙәтеп һауып эскән һыйырыңдан – 3500 һум, биш баш һарыҡ-кәзәңдән – 6500 һум. Бөтәһенең суммаһы – 12.000 һум йыллыҡ килем.

Гөлсәсәк. Һе! Ысынлап та ҙур байлыҡ. Уны, бөртөгөн ҡалдырмай, ҡырып-ҡырсып алғайнығыҙ, иншАллаһ, инде үҙемә ҡайтарып бирҙегеҙме ни? белмәй ҙә ҡалғанмын шуны. Кем бирҙе – Сталин бабай үҙеме, әллә Карл Маркс олатаймы?!

Байсәләм. Гражданка Гөлсәсәк, контра һуҡалайһың. Иптәш Сталин и Карл Маркс здесь ни при чем. Әле генә фининспектор исәпләп сығарған ун ике мең һум килемеңдән һин закон буйынса мотлаҡ тейеш бер мең дә ике йөҙ һум һалым түләргә. Шулаймы, совет власы? *(Хәкимгә һөҙөп ҡарай).*

Хәким *(кых-кых йүткеренеп).* Түләргә, түләргә...

Гөлсәсәк. Нишаналар, аҡылығыҙ камил түгелме әллә? Йылайыр урманына ағас киҫергә ебәрелгән ирем шунда туңып үлгәндән һуң, өйөм дә, мал-тыуарым да, хужалығым да ҡалманы, үҙем кешелә өйҙәш торам даһа!

Рифҡәт. Это нас не касается. Шәхсән үҙең налицо бармы – бар. Тимәк, өйөң дә, хужалығың да бар.

Гөлсәсәк. Күҙҙәрегеҙ тондомо: нигеҙемдә үтәнән-үтә ел уйнай.

Байсәләм. Тимәк, непременно халыҡ дошманы һин. Налог түләмәҫ өсөн, нигеҙеңде ҡоротҡанһың, совет власына ҡаршы ҡоротҡослоҡ ҡылғанһың. Кәм тигәндә ун йылға ултыртырға кәрәк һине.

Гөлсәсәк. Уй, шулай ғына итә күр, йәнекәйем! Ысын тамуҡтан сығып, ысын ожмахҡа керермен! Ҡаҙна иҫәбенән йылы өйҙә йәшәрмен, жмых ашамайынса ла эс кәпәйтеп ятырмын, өҫтөмә лә берәй ярпы бирерҙәр. Күтемдә ыштаным юҡ, бына ҡара, нәсәлник! *(Итәген күтәреп күрһәтә).*

Байсәләм. Тфү! Долой күҙ алдымдан!

Милиционер. Әйҙә-әйҙә! *(Ишеккә этәрә).*

Гөлсәсәк. Нәсәлник, кил әле, үҙеңде бер үпәс итәйем! Үх-ли, Байсәләм, ожмахыңа мәтәләм! *(Таҡмаҡлап бейей-бейей сығып китә).*

Байсәләм. Гөлсәсәк булманы был – ылғый шайтан таяғы! *(Усын өҫтәлгә һугып).* Все! Ылау әҙерме? Өсөһөн бер санаға бөрөп һалығыҙ – тура районға, прокурорға!

Милиционер инә.

Милиционер. Өс ыристанка санала, юл аҙығы, кейем-һалым хәстәрләргә һорайҙар.

Байсәләм. Күт аҫтарында бесән, өсөһөнә бер толоптун – ун саҡрымды үткән арала ҡатмаҫтар. Аҙыҡты ла шахтаға төшкәс алырҙар. Елдерт, генерал, елдерт!

Милиционер. Есть! *(Китә).*

Шәғәли инә, билендә ағас ҡылыс.

Шәғәли. Упалнамус, ҡарале әй, милисәйҙе ҡайтарып ебәр, асыҡҡан, өйҙә балалары көтә. Апайҙарҙы үҙем һаҡлап илтермен, бына ҡылысым.

Байсәләм *(алъйотто елкәһенән бөрөп алып һелкетә).* Урамда контр йырлаған һин инеңме?

Шәйәхмәт. Уй-уй, муйынымды өҙәһең, ебәр, ағай!

Байсәләм. Һин инеңме?

Шәйәхмәт. Мин инем, мин инем!

Байсәләм *(Хәким ягына бармаҡ төртөп).* Әнә совет власы, ишеттерт шул контрыңды!

Шәғәли. Әлү-әлү, ауырта! Ошолай тип йырланым:

Совхоз ҡаҙала микән,
Колхоз тарала микән?
Ҡапҡа һайын упалнамус –
Эттән ярала микән?

Байсәләм *(ебәрә).* Иптәш совет власы, ниңә сара күрмәйһең, антисовет таҡмаҡсыны Тоҙтүбәгә оҙатмайһың?

Хәким. Кире бороп ҡайтарҙылар. Прокуратурала башҡорт телен белгестәрҙән тикшерткәс, антисовет түгел, тип тапҡандар.

Байсәләм. То есть?

Хәким. Сөнки “совхоз ҡаҙала” тигәне – үрсетергә ҡаҙ ала, “колхоз тарала” тигәне – орлоҡҡа тары ала, тигән һүҙ имеш.

Байсәләм. Ә һуңғы ике юлы?!

Хәким. Беҙҙең үҫәргән башҡорттары бик боронғо замандарҙа этте хоҙайға һанағандарын, эткә табынғандарын беләһең бит. “Эттән ярала” тигәнде лә шул боронғо башҡорт теле ҡалыбында уполномоченный иптәште изгеләштереү билгеһе тип тапҡандар.

Байсәләм. Тфү! – сәнселгере башҡорт теле! *(Хахылдап көлөшөү).* Вон, идиот! (Шәғәлиҙең күтенә тибә).

Шәғәли. Рәхмәт, рәхмәт, ағаҡайым, иҙиәтләп ололаның! *(Табан тайҙыра).*

Йәмилә, Алһыу инә.

Йәмилә. Саҡырттығыҙмы, ни йомош?

Байсәләм *(устарын ыуып).* Әәә, Йәмилә туташ, рәхим ит, үҙеңә генә әйтер архиважный хәбәр бар.

Йәмилә. Кешеләр алдында әйт.

Байсәләм. Секрет, дивизияға ҡағылған һуғыш секреты. Ағай-эне, таралышығыҙ, икебеҙҙе ҡалдырығыҙ. *(Хәким ҡултыҡ таяҡтарын туҡылдатып йүнәлә).* Алһыу туташ, ә һин нимә көтәһең?

Алһыу. Әхирәтем менән бергә килдем, бергә ҡайтам.

Байсәләм. Үҙең генә ҡайт.

Йәмилә. Әхирәт, ҡайта тор.

Рифҡәт *(Алһыуҙы ҡултыҡлай).* Әйҙә-әйҙә, үҙем оҙатып ҡуям *(китәләр, Байсәләм ишек келәһен элә).*

Алһыу. Ниңә элдең, ысҡындыр.

Байсәләм. Секрет!

Йәмилә. Улайһа, сығам.

Байсәләм. Сеү! Хәсәнеңдән хәбәр бар.

Йәмилә. Ә?!

Байсәләм. Дивизияға һорау ебәргәйнем, рейдтан сыҡҡан политбулек башлығы майор Ҡадировтан яуап килде.

Йәмилә. Ә?! Нимә тип?

Байсәләм. Дошман фронтын ярып үткән саҡта сержант Хәсән Байтуриндың гранаталар бәйләме менән дошман танкына ташланғанын, ҡуша шартлап геройҙарса һәләк булғанын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, тигән, бына хаты.

Йәмилә. Аһ... *(Иҫен юйып тәгәрәгәнендә Байсәләм күтәреп алып диванга һала, ҡоторонап үбә).*

Байсәләм. Һин минеке! Һин минеке!

Йәмилә. Туҡта!

Байсәләм. Ух! Туҡтамайым! *(Айпалашып тартҡылаш).*

Ут һүнә.

## 6-сы сәхнә

Шул уҡ өй, Хикмәт менән Язарый герман феләгәһе ҡуйылған өҫтәл ҡырында ултыра. Төпкө бүлмәнән Гөлзәғифәнең балаларҙы өгөтләп тынысландырҡаны ишетелә.

Хикмәт. Шулай, улым...

Язарый. Шулай, атай...

Хикмәт. Ганс улыма... пүлә атҡан пистолетыңды күрһәт.

Язарый. Бына, атай *(кобуранан сыгарып һала).*

Хикмәт *(алып).* Яңы заман ҡоралы.

Язарый. Макаров пистолеты.

Хикмәт *(көбәкте маңлайына терәп).* Атылып үлергәме?

Язарый. Юҡ, атай, үҙ ҡулың менән мине ат. Бер туған абзыйымды аттым...

Хикмәт. Их! *(Пистолетты өҫтәлгә һала).*

НКВД-сылар *(ике хәрби)* керә, алдағы капитандың ҡулында наган.

Капитан. Фронтовик, акція һиңә ҡағылмай. *(Язарый пистолетын алғанды күреп)*. Лейтенант, ҡоралды һал.

Язарый. Кобураһына һалам. Табель ҡоралым.

Капитан. Ярай, сығып һауа һулап кер. *(Язарый китә).*

Хикмәт *(тора).* Эш ниҙә?

Капитан. Ниҙәлеге үҙеңә яҡшы мәғлүм. *(Фрау Гретхен портретына ишаралап)*. Был кем?

Хикмәт. Әүәлге ҡатыным.

Капитан. Фашист сукаһымы?

Хикмәт. Ул саҡтарҙа донъяла фашист юҡ ине, фрау Гретхен менән мин беренсе донъя һуғышы осоронда ҡушылдыҡ.

Капитан *(портрет урамына ҡыҫтырылған фотоны алып, артындағы яҙыуға күҙ һалып).* Герр генерал Һанс Һикмут. Фашист генералы ниңә түрбашта?

Хикмәт. Ул минең улым.

Капитан. Гитлерҙың нацист партияһында ҡасандан биреле ағза булып тораһың?

Хикмәт. Капитан, хаҡың юҡ! Мең туғыҙ йөҙ егерменсе йылдан уҡ мин Сталиндың ВКП(б) ағзаһы.

Капитан. Шуның өсөнмө был фашистарҙы иптәш Сталин менән йәнәшә ҡуйҙың? Колхоз Ҡарайғырын Гитлергә бүләк итеп бирергә әҙерләнең?

Хикмәт. Мин әҙерләгәндә геноссе Гитлер бөйөк иптәш Сталындың ҡәҙерле дуҫы ине.

Капитан. Молчать!

Икенсе хәрби. Кейен, ҡартлас, кейен, тегендә барғас аңлашырһың *(фрау Гретхен портретын йолоп ала, Хикмәт ашыҡ-бошоҡ кейенә).*

Гөлзәғифә төпкө бүлмәнән сыға.

Гөлзәғифә. Бабай, ҡайҙа йыйындың?

Икенсе хәрби. Курортҡа, инәй, курортҡа.

Язарый инә.

Язарый. Иптәш капитан, рөхсәт итегеҙ, мин дә һеҙҙең менән барам, эштең асылын аңлатып бирәсәкмен.

Капитан. Фронтовик икәнеңде иҫәпкә алып, рөхсәт. Киттек, киттек! *(Китәләр).*

Гөлзәғифә. Балаҡайым...

Язарый. Әсәй, борсолма, аңлашылмаусанлыҡ ҡына.

## 7-се сәхнә

Шул уҡ өй, Язарый ҡайтып керә.

Гөлзәғифә. Тиҙ әйләндең, ҡайҙа атайың?

Язарый. Юлым уңманы, әсәй. Ауыл советынан уҡ кире борҙолар, атайҙы ҡаты һаҡ аҫтында Ырымбурға алып киттеләр.

Гөлзәғифә. Районда ғына аңлашһаларсы, ниңә әйтмәнең?

Язарый. Эше ҙурға китте, Ырымбурҙа тройка хәл ҡыласаҡ...

Гөлзәғифә. Нимә һуң ул турайка?

Язарый. Ысынлап та турайка, яҙмыштарҙы тураусы. 58-се статья, тимәк.

Гөлзәғифә. Быныһы ни була тағы?

Язарый. Хат яҙыу хоҡуғынан мәхрүм ҡылып, ун йылға ҡатырыу, тигән һүҙ. Һыуға төшкән балталай батты, атай...

Гөлзәғифә. Я раббым, күрәһеләребеҙ бар икән...

Язарый *(ҡаранып)*. Йәмилә һылыуым ҡайҙа?

Гөлзәғифә. Ауыл советына саҡыртылғайны бит, һаман ҡайтмай ҙа ҡайтмайсы...

Алһыу инә.

Алһыу. Әхирәтем ҡайттымы?

Гөлзәғифә. Ниңә беҙҙән һорайһың, бергә киткәйнегеҙ ҙәһә.

Алһыу. Әхирәтемде упалнамус алып ҡалды, үҙенә генә әйтә торған ниндәйҙер мөһим хәбәр бар, тип.

Гөлзәғифә. Был һис яҡшыға түгел...

Язарый. Алһыуым, ниңә уны көтмәнең?

Алһыу. Юлда көтөп алдым...

Язарый. Шунан?

Алһыу. Хәле тетрәндерткес ине. "Ни булды?" – тип һорағас, был донъяла йәшәгем килмәй, Байсәләм йәнемде алды, тине лә ҡырыҫ хушлашты. Күҙ төптәре күгәргән, сәсе туҙғыған, үҙең бүләк иткән ебәк күлдәгенең итәге шара-ярылып, тимгел-тимгел ҡан таптары... Артабанғыһын белмәйем.

Язарый. Эҙләргә, эҙләргә! *(Йүгереп сығып китә, артынан Алһыу эйәрә).*

Гөлзәғифә. Эй Аллам!

Хөнәфиә инә.

Хөнәфиә. Әссәләмәғәләйкүм, Хикмәт мырҙа өйҙәме?

Гөлзәғифә. Курортҡа, тип алып киттеләр уны, ә бына һин курортыңдан иҫән-имен ҡайтҡанһың.

Хөнәфиә. Ҡайттым шул, һауаһы килешмәне *(доға уҡына).*

Гөлзәғифә. Ярар, ауылда ясин сығыр берҙән-бер муллаһың.

Хөнәфиә. Ижаб ҡабул ҡылырға ла әҙермен, мәҫәлән, Язарый улың менән Алһыу ҡыҙымды. Өс көнгә генә булһа ла, сәстәре сәскә бәйләнһен.

Гөлзәғифә. Амин, әйткәнең тура килһен *(доға ҡылалар).*

Язарый Йәмиләнең йәнһеҙ кәүҙәһен күтәреп индереп урындыҡҡа һала.

Гөлзәғифә. Абау, балаҡайыма ни булған?

Язарый. Әйтә алмаҫтыр инде... Аҙбар урҙаһынан элмәген ҡырҡып алдым... ҡотҡарып булманы.

Алһыу үкереп илай, Хөнәфиә ишеккә ыңғайлай.

Гөлзәғифә. Туҡта, ҡарт төлкө, ясин сығырға кәрәк.

Хөнәфиә. Хәлем юҡ бит әле, ҡәрендәш, тамағым ас.

Гөлзәғифә (өҫтәлдәге ҡалдыҡ һалдат паегын – сирек бүкәнкәне алып бирә). Бына хәйере.

Хөнәфиә (икмәкте умыра ҡабып, ҡалғанын ҡуйынына йәшерә). Ярай-ярай, ҡәрендәш, мәрхүмәне теге өйгә һалайыҡ.

Язарый мәйетте төпкө бүлмәгә илтә, Язарыйҙан башҡалары барыһы ла эйәрә. Төҫө ҡасҡан Байсәләм килеп инә.

Байсәләм *(илап)*. Йәнекәйем, бәғеркәйем... Иртәнсәк ҡына күгәрсендәрҙәй гөрләшеп ҡул бирешкәйнек, ҡыҙыл туй яһап ҡауышырға килешкәйнек... ҡайғылы хәбәре йәнемде алды... Һин, була яҙған ҡайнағам, берүк ғәфү ит мине: күҙ нурымды һаҡлап ҡала алманым...

Язарый *(киҫкен).* Киттек, ҡуңалтаҡ ҡуңыс кейәүем.

Байсәләм. Ҡайҙа?

Язарый. Кәртә артындағы Һаҡмар сағылына.

Байсәләм. Юууҡ, мин бармайым!

Язарый. Йәмилә һеңлем сағылда тороп шиғыр һөйләргә, йырларға ярата ине. Текәһендә баҫып, мәрхүмәне иҫләйек.

Байсәләм. Үҙең генә бар, ҡайнаға, мин... мин...

Язарый. Ҡурҡма, фашисҡа ғына ҡанһыҙ мин. Фашист түгелһеңдер бит?

Байсәләм. Юҡ-юҡ, коммунист мин *(китәләр).*

Тышта мылтыҡ тауышы, төпкө бүлмәләгеләр өйөрөлөп сыға.

Гөлзәғифә. Кем атты? Кемгә атты? Упалнамус ҡайҙа?

Язарый инә.

Язарый. Мин аттым. Бүреме, фашисмы шәүләләнде.

Гөлзәғифә. Балам, упалнамус ҡайҙа?

Язарый. Ҡалды.

Гөлзәғифә. Ҡайҙа ҡалды?

Язарый. Ҡалаһы ерендә ҡалды.

Гөлзәғифә. Я Раббый!

Язарый. Әсәй, мин китәм (вещмешогын ала). Фронт законы ҡаты, ҡайтып өлгөрөр кәрәк.

Алһыу *(һыҡтап).* Өс көнөң тулманы бит!

Язарый. Юл оҙон, шунда туласаҡ.

Хөнәфиә. Йәмәғәт, ҡәбер әҙер, тип хәбәр килде, ҡояш байымаҫы элек гүр эйәһе ҡылайыҡ.

Язарый. Ғәфү итегеҙ, әсәй, олатай, Алһыуым! Бәхил бул, яратҡан Йәмилә һеңлем! Маңлайыңдан үбеп кенә китәйем *(төпкө бүлмәгә инеп сыга).* Хөнәфиә олатай, үҙеңә тапшырам.

Хөнәфиә. Хәйерле юл, яугир, иҫән-һау әйләнеп ҡайт.

Алһыу *(һөйгәненең муйынына аҫылына).* Күргәндәй ҙә булманым, үҙең менән алып кит!

Язарый. Ярамай, ярамай...

Алһыу. Вокзалғаса оҙатайым, поезд килгәнсе генә бергә булайыҡ, ҡауышайыҡ... балаң ҡалыр, исмаһам.

Хөнәфиә *(асыулы).* Гонаһка кермә, ҡыҙым, ижаб ҡабулһыҙ ярамай *( сыгып китә).*

Алһыу. Язарыйым, әләйһә... ошондағы аҡ мунсала...

Язарый. Ҡайтҡас, ҡайтҡас! Атаһыҙ бала ҡалдырырға, яҙмышыңды боҙорға намыҫым ҡушмай, йәнекәйем, берҙән-берем... Хушығыҙ! Әсәй, барып еткәс яҙырмын.

Алһыу. Йәнем... үлтерәһең...*(Һөйгәненең аяҡтарына йәбешеп һөйрәлеп ҡала).*

Гөлзәғифә *(ултырып дога ҡыла).* Бөттө... Гөрләп торған күмәк инек, япаяңғыҙым ҡалдым...

Алһыу *(үкһеп, әбейҙе килеп ҡосаҡлай).* Яңғыҙ ҡалманың, ҡәйнәм, мин бар, бергә торорбоҙ, Язарыйыбыҙҙың ҡайтыуын дүрт күҙ менән көтөп алырбыҙ!

Гөлзәғифә *(ҡыҙҙың арҡаһынан һөйөп).* Киленем-киленкәйем!..

Төпкө бүлмәнән бер бәләкәс ҡыҙ, бер малай осоп сыға:

-- Оләсәй, беҙ шәбәйҙек! Беҙ иҫән!

-- Оләсәй, беҙ һине яратабыҙ! – бейеп-бөтөрөлөп уйнайҙар.

Малай, йүгереп барып, тәҙрә башындағы шаңғыраҡты (радиорепродукторҙы) эшләтеп ебәрә, дүртеһе бергә уҡмашып, Лебедев-Кумачтың киң дарьялай талғын ағылған билдәле йырын баҫып тороп тыңлай:

Широка страна моя родная,
Много в ней лесов, полей и рек.
Я другой такой страны не знаю,
Где так вольно дышит человек...

## Шаршау

21.05.2016.